*Ғәйбәтте кем һөйләһә лә,*
*Ғәйбәтте кем тыңлаһа ла -*
*Гонаһтарын уртаҡ итәм.*
*Ғәйбәт һөйләгән табынды*
*Фәрештәләр урап үтә.*
*Рауил Бикбаев. "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис".*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 МАРТ (БУРАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№12 (586)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Телебеҙҙә - ят һүҙҙәр,
фиғелебеҙҙә - ят ҡылыҡ



3

Йәнһүрәттең дә...
яҡшыһы, яманы була



6

Үлем күрһәткесе артыуға...
шәкәр сире лә булышлыҡ итә



8-9

Әүлиәлек - бөйөк көс ул,
йәғни Мифтахетдин мулла тураһында бер хәтирә



10

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостандың ил тарихында иң беренсе булып автономиялы республика статусы яулауына 95 йыл тулды. Рәсәй федерализмының нигеҙ ташын тәшкил иткән ошо тарихи ваҡиғаға бөгөнгө ҡараштан сығып ниндәй баһа бирергә була?

***Нурислам КАЛМАНТАЕВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Ошо көндәрҙә беҙ Башҡорт автономияһының 95 йыллығын һәм был ваҡиғаны Әхмәтзәки Вәлиди менән уның арҡаҙаштары башлап ебәргән милли хәрәкәт уңышҡа өлгәшкән дата тип билдәләйбеҙ. Автономия яулау бик ҡатмарлы була. Әйткәндәй, беренсе булып юл ярыусыларға бер ваҡытта ла еңел түгеллеген яҡшы беләбеҙ. Шуныһы ҡыҙыҡ: милли хәрәкәтте башлап ебәреү Әхмәтзәки Вәлидиҙең башына 1917 йылда килә. Ошо йылдың февралендә ул "Шура " журналына "Бөрйән башҡорттары" тигән мәҡәлә яҙа. Унда Вәлиди бөрйән башҡорттарының ҡыйыу, ғәскәри халыҡ булыуы менән һоҡлана. Тап бына шул мәлдә Февраль революцияһы башланып китә. Урамға сығып, шул ваҡиғаларҙың шаһиты булған Вәлидигә шул саҡ ҡыйыу фекер килә: "Башҡорттар бына тигән ғәскәри рухлы, ҡыйыу халыҡ, улар менән дә милли хәрәкәт башлап ебәрергә, үҙ республикабыҙҙы төҙөргә була бит!" Әйтергә кәрәк, ғалим булыуы, тарихты бик төплө белеүе өҫтөнә, Әхмәтзәки Вәлиди бик көслө рухлы шәхес тә була. Алдан күрә белеп, эште ваҡытында башлап ебәрергә лә кәрәк бит. Бер йыл эсендә генә лә Ырымбурҙа өс-дүрт тапҡыр ҡоролтай һәм съездар уҙғарыла. Вәлидиҙең көрәштәштәре лә уҡымышлы, егәрле, рухлы, эш эшләй торған йәш егеттәр була. Шул тиклем төплө итеп яҙылған программа, ер һәм башҡа мәсьәләләр буйынса ҡарарҙар, резолюциялар ҡабул ителә. Был мәл милли мәсьәләләрҙең дә өлгөрөп еткән осоро булғандыр, сөнки халыҡ та уға әҙер булған бит. Әйткәндәй, халыҡ та көсө, берҙәмлеге менән айырылып торған, араларында уҡыған, белемле кешеләр ҙә күп булған. Беҙ илде тотоп килгән ерле халыҡ, үҙебеҙҙең республикабыҙ булырға тейеш, тигән фекер йәшәгән халыҡ араһында. Тарихтан мәғлүм булыуынса, В.И. Ленин федерализм идеяһы яҡлы була, ләкин уның арҡаҙаштары Сталин һәм башҡалар унитар дәүләт төҙөйбөҙ, тип, һәйбәт идеяны таратыуға, юҡҡа сығарыуға күп көс һала. Федерализм идеяһын һәм традицияларын бөгөн беҙ бөтә камиллығында тергеҙергә һәм үҫтерергә бурыслыбыҙ. Рәсәйҙән бер ҡайҙа ла китмәйбеҙ, киреһенсә, республикабыҙҙы лайыҡлы йәшәтеп, Рәсәйҙең дә ҡеүәтен арттырыуға булышлыҡ итәбеҙ. Әйткәндәй, бөгөн донъя кимәлендә көнүҙәк темаға әүерелгән Ҡырым ваҡиғалары ла федерализм мәсьәләһенә барып тоташа. Ил Президенты В.В Путин Ҡырым халҡына үҙаллылыҡ һәм байтаҡ вәкәләттәр вәғәҙә итә икән, тимәк, федерализм да, ҡайһы бер сәйәсмәндәр теләгәнсә, юҡҡа сыҡмаясаҡ, йәшәйәсәк, тигән һүҙ.

***Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Ашҡаҙар" гәзите баш мөхәррире:*** Республиканың хоҡуҡтары элекке автономия хәлендәгенән тарайҙы, әлбиттә. Шул уҡ федератив мөнәсәбәттәр юҡҡа сыға бара, федераль кимәлдәге чиновниктар күбәйҙе, уларҙың етәкселәрен ситтән килтереп ҡуялар, мәғарифта төбәк компонентын алып ташланылар - былар барыһы ла хоҡуҡтарыбыҙҙың тарая, кәмей барыуы тураһында һөйләй.

Конституция менән нығытылған хоҡуҡтарыбыҙ әле лә етерлек, тик уларҙы закон нигеҙендә яҡлау өсөн беҙгә берҙәмлек һәм ныҡышмаллыҡ етмәй. Беҙҙең зыялыларыбыҙ бөгөн халыҡ мәнфәғәтен юғары ҡуйып, килешеп, бер фекергә килеп эш итә алмай. Халыҡ бит уларға ҡарап тора, уларҙың тын алышын тоя. Ошондай һынылышлы осорҙа милләтте тупларҙай көслө шәхестәребеҙ ҙә күренмәй. Халыҡ шағирҙарыбыҙ ҙур трибуналарға сығырға баҙнат итмәй. Битарафбыҙ. Бына ошо битарафлыҡ беҙҙе ниндәйҙер билдәһеҙ бер хәлгә килтереп терәне лә инде. Башҡорт милләте булғаны өсөн генә Башҡортостан Республикаһы бар, ә бөгөн башҡортлоҡто һаҡлап ҡалыу өсөн һәр кем дә ҡулынан килгәнен эшләйме? Юҡ. Телде генә алайыҡ. Әлеге лә баяғы, тел бөтә, тип зарланыуҙан ары китә алмайбыҙ, ә ошо уҡ зарланған зыялыларыбыҙҙың балалары тел белмәй бит. Ә ҡалғандар тураһында ни әйтәһең! Бер генә миҫал: бынан бер нисә йыл элек ижадында йыш ҡына башҡорт телен данлаған оло шағирыбыҙҙың юбилейы айҡанлы хәтер кисәһе ойошторолғайны (ул хәҙер мәрхүм инде), бына шунда шағир улдарының бер ауыҙ ҙа башҡортса белмәгәнен күреп, ишетеп, йөрәгем әрнегәйне. Әхмәтзәки Вәлиди ҙә бит, иң элек телде һаҡлағыҙ, тип әйтеп ҡалдырған. Әгәр һәр беребеҙ ошо васыятты иҫендә тотоп, балаларына иң элек әсә телен өйрәтһә, ғаиләһендә милли мөхит булдырһа, йортона туған телдә гәзит-журналдар килеп торһа, йырмондарыбыҙ тынмаһа, йәш быуында телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә бермә-бер ихтирам артыр ине, тип уйлайым. Үҙаллылыҡтан бер нәмә лә ҡалманы ул, тип ҡул һелтәү урынына, әйҙәгеҙ, һәр беребеҙ бөгөндән эште ғаиләнән башлайыҡ, мөстәҡиллегебеҙҙе яҡларҙай, һаҡларҙай, уның мөмкинлектәрен киңәйтерҙәй телһөйәр, илһөйәр, эшһөйәр, сая, белемле улдар һәм ҡыҙҙар үҫтерәйек!

**(Дауамы 2-се биттә).**



***✓ Белем биреү буйынса милли стратегия уйланылып, тормошҡа ашырылырға тейеш. Милли республикаларҙың төп халҡының мәнфәғәттәрен алға ҡуйған, милли телде, уны өйрәнеү һәм уҡытыу буйынса махсус план төҙөргә кәрәк.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Башҡортостандың ил тарихында иң беренсе булып автономиялы республика статусы яулауына 95 йыл тулды. Рәсәй федерализмының нигеҙ ташын тәшкил иткән ошо тарихи ваҡиғаға бөгөнгө ҡараштан сығып ниндәй баһа бирергә була?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, БР Мәҙәниәт министрлығының Тарихи комарткыларҙы һаҡлау буйынса фәнни-ғәмәли үҙәк директоры:*** 1919 йылда бер төркөм йәш зыялылар тормошҡа ашырған милли үҙаллылыҡ идеяһы бөгөн дә дауам иттерелә. Эш башланған, ләкин ул тамамланмаған, уны әле беҙҙең балаларыбыҙҙың балалары, уларҙың балалары дауам итәсәк, тип уйлайым. Автономия онотолдо, суверенитет бөттө, тип хәбәр һөйләү - ул төптө дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, минең ҡыҙым башҡорт мәктәбендә үҙ телен өйрәнә, әсә теле һәм туған әҙәбиәт буйынса төрлө конкурстарҙа ҡатнашып йөрөй, телевидениенан башҡортса тапшырыуҙар алып бара, ә баш ҡалабыҙ Өфө урамдарында башҡортса яҙыуҙар эленгән, театрҙарҙа башҡортса тамаша һәм концерттар бара икән, нисек итеп беҙ автономия, унан ҡала суверенитет ҡаҙаныштары юҡҡа сыҡты, тип әйтә алабыҙ? Былар бит бөтөнөһө лә Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйехзада Бабичтарҙың аҡыл ижады һәм аяуһыҙ көрәше емештәре. Киләсәктә бына ошо ҡаҙаныштарыбыҙҙы артабан ишәйтеү, камиллаштырыу һәр беребеҙҙең көндәлек эше булырға тейеш. Билдәле бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, милләт миңә нимә бирҙе, тип һорама, ә милләтем өсөн мин ни эшләнем, тип үҙеңдән һора, сөнки ҡаҙаныштарыбыҙҙы һаҡлау ҙа, яҡлау ҙа, уны сәскә аттырыу ҙа күп йәһәттән үҙебеҙгә бәйле.

***Клара ХӘМИҘУЛЛИНА, Дәүләкән районы Мәкәш ауылы әбинәйе:*** Автономия тураһында һүҙ сыҡһа, бәғзе берәүҙәр:"Эй, онотолдо бит инде ул..."- тип, ҡул һелтәп кенә ҡуя. Мин бындай әҙәмдәр йөҙөндә тотош тарихына ҡул һелтәүсе битараф наҙандарҙы күрәм. Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙ тарихы ентекләп өйрәнелә. Элек, совет осоронда баҫырылып килгән бик күп мәғлүмәттәр, тарихыбыҙҙағы "аҡ таптар" асыҡлана. Шуларҙан күренеүенсә, автономия еңел генә яуланмаған. Ваҡытында автономия идеяһының башында торған зыялы шәхестәребеҙҙең, айырыуса Әхмәтзәки Вәлидиҙең, тарихи ҡаһарманлығы ул автономия. Уны яулаған замандарҙан күпкә элгәрерәк тә әле ерле, аҫаба халыҡ булараҡ, Рәсәй батшалары башҡорт иле менән фәҡәт килешеү нигеҙендә йәшәгән. Башҡорттарҙа һәр заманда ла ватансылыҡ хисе көслө булған. Был, берҙән, оло ватаны итеп ҡараған Рәсәйгә тоғролоҡ һаҡлауҙа, уның именлеге хаҡына яуҙар сабыуында күренһә, икенсенән, ултыраҡ, аҫаба халыҡ булараҡ, һәр дайым милли үҙаллылыҡҡа ынтылышында сағыла. Башҡортостан Украина түгел, ул ватанына бер ҡасан да хыянат итмәгән, үҙ илен дә талауға, ҡыйырһытыуға юл ҡуймаған. "Рус түгелмен, ләкин российянмын" тигән ҡанатлы шиғри юлдар ошо торош рәүешенән килеп сыҡҡан да инде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## *ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# РУХ ТАЛАБЫ БУЙЫНСА ЛА...

## һөнәр һайлаһын йәштәр

**Риф ӘХМӘҘИЕВ, БДУ-ның Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы, профессор:** Оҙаҡ йылдар ошо юғары белем биреү йортонда эшләү осоронда уҡытыу системаһының төрлө үҙгәрештәренә шаһит булынды. Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты ла үҙ дәүерендә төрлө мәлдәр кисерҙе. Әлеге көндә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса юғары белемле белгестәр әҙерләүҙең ил кимәлендә талап ителмәй башлауы, уҡытыу эшенең баҙар системаһына туранан-тура бәйләнеүе факультет өсөн ыңғай күренеш түгел. Элегерәк факультетта булдырылған һәр йүнәлеш буйынса 30-40 абитуриент ҡабул ителһә, бөгөн бюджетлы урындар һаны 10-дан артмай. Берҙән, был баҙар иҡтисады менән бәйле, икенсенән, юғары белем алып сыҡҡан йәш белгестәрҙең эш таба алыуалмауы ла бәкәлгә һуға. Һуңғы йылдарҙа ауыл мәктәптәренең күпләп ябылыуы, уҡытыу программаларында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре ҡыҫҡартылыуы әҙерләгән белгестәребеҙгә ихтыяжды кәметте. Нефтекама, Учалы, Сибай ҡалаларында асылған БДУ филиалдарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса белгестәр әҙерләү туҡтатылыуы ошоно раҫлай. Бюджет урындары аҙ булыу арҡаһында йылына кәмендә 60 мең һум түләп уҡыу талап ителгәс, күп кенә йәштәр юғары белем алыу мөмкинлегенән мәхрүм ҡала. Шуға күрә, бөгөн хөкүмәт, юғары власть органдары беҙҙе оло тормош һуҡмағына бер ниндәй ҙә ярҙам өмөт итергә урын ҡалдырмай сығарып бәрә кеүек тойолоп китә. Шунан һуң нисек итеп йәш быуындан илһөйәрлек, ватансылыҡ, милли рух, мәҙәнилек талап итә алабыҙ инде? Хатта белем биреү системаһы аша ла беҙҙе ҡурсаламаған илгә ҡарата кемдең күңелендә һөйөү яралыуы мөмкин? Бөгөн һәр нәмә өсөн үҙең түләп, барлыҡ проблемаларыңды үҙең хәл итеп йәшәгәндә, тыуған илде һөйөргә кәрәк, тигән һүҙҙәрҙе йәштәрҙең әллә ни ҡабул итә һалмауы аңлашыла түгелме?

Рәсәйҙәге белем биреү системаһын донъя кимәленә яраҡлаштырабыҙ, тип, өс быуындан торған уҡытыуға күсеп киттек. Әлбиттә, бакалавр белемен үҙләштергән кеше сит илдәрҙә лә эш таба аласаҡ, тип ышандырған булалар. Әммә бының өсөн беҙҙең студенттар һайлаған һөнәре буйынса ғына түгел, сит телде лә яҡшы кимәлдә белеүе менән айырылып торорға бурыслы. Илебеҙҙә сит телдәрҙе уҡытыу, уның буйынса белгестәр әҙерләү буйынса эштәр бик үк шәптән түгел бит әле. Бигерәк тә ауыл мәктәптәрендә сит телдәр ауыр өйрәнелә. Ошондай шарттарҙа Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты өсөн конкуренцияға һәләтлекте һаҡлап ҡалыу еңелдән түгел. Киләсәктә бөгөнгө ауырлыҡтарҙы хәл итеү өсөн ил кимәлендә белем биреү буйынса милли стратегия уйланылып, тормошҡа ашырылырға тейеш. Милли республикаларҙың төп халҡының мәнфәғәттәрен алға ҡуйған, милли телде, уны өйрәнеү һәм уҡытыу буйынса махсус план төҙөргә кәрәк. Был стратегик план федераль кимәлдә раҫланырға тейеш. Сөнки киләһе йылдан БДИ һөҙөмтәләре буйынса юғары уҡыу йортона кәрәкле балл йыйып уҡырға инеүсе абитуриенттарҙан туған тел буйынса имтихан алыу мөмкинлегенән мәхрүм булырға торабыҙ. Өҫтән төшөрөлгән указдарға нигеҙләнгәндә, милли телдәрҙән имтихан ҡабул ителмәй башлауы ла бар. Ошондай ябай булмаған осорҙа, милләттәштәр, берҙәм булһаҡ ине. Балаларыбыҙға милли рухты һеңдереп, туған телде өйрәтеп, уҡытып үҫтерергә теләйбеҙ икән, беҙгә юғары уҡыу йортон тамамлаған йәш белгестәр, һис шикһеҙ, кәрәк. Тел бер ғаиләнең аралашыу сараһы ғына түгел. Тел - ул бөтә йәмғиәттең аралашыу сараһы, рәсми ҡағыҙҙар, ғилми хеҙмәттәр, фән теле лә ул. Ошоно аңлаған йәштәребеҙ беҙҙең факультетҡа үҙҙәре теләп, рух талабы буйынса уҡырға килһен ине.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

*КЕМ АЛЫҠ?*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**31 мартҡа тиклем тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән, йәғни 384 һум 36 тингә, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2014 йылдың икенсе яртыһына яҙыла алаһығыҙ.**

Былтыр 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн баҫмабыҙға яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр ай һайын беҙҙең бүләктәребеҙгә - ҡыҙыҡлы китаптарға лайыҡ булды. Был дәртләндереү сараһын әле лә дауам итәбеҙ. Мартта 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 2 уҡыусыбыҙ - "История башкирского народа", 10 уҡыусыбыҙ башҡортса "Дини календарь", 5 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның "Көҙгө ысыҡ" китаптарын алып ҡыуаныр**.

Ә инде эргә-тирәгеҙҙә "Киске Өфө"гә йылдың тәүге яртыһына яҙылырға онотҡан, өлгөрмәгән кешеләр булһа, уларға ошо һүҙҙәребеҙҙе тапшырығыҙ: гәзитебеҙгә 17 апрелгә тиклем яҙылғандар уны майҙан алдыра башлаясаҡ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Киске Өфө" гәзитенә республиканың һәр районында, ҡалаһында, ауылында яҙылып була.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Сочиҙағы ҡышҡы Паралимпия уйындары еңеүселәре һәм призерҙары Ирек Зарипов, Кирилл Михайлов, Азат Ҡарасурин, Александр Давидович, шулай уҡ уларҙың тренерҙары Өфөгә ҡайтты. Паралимпиясыларҙы туғандары, дуҫтары һәм көйәрмәндәре менән бергә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡаршы алды. Республика башлығы Сочиҙа Олимпия һәм Паралимпияла Башҡортостан спортсылары еңеүҙәре хөрмәтенә ҙур байрам әҙерлеге тураһында һөйләне. Күҙаллау буйынса, сара яҡын ваҡытта Өфөнөң Спорт һарайында уҙасаҡ.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй йыйылмаһы ағзалары - Сочиҙа XI Ҡышҡы Паралимпия уйындары чемпиондары һәм призерҙары менән осрашты һәм спортсыларға дәүләт наградаларын тапшырҙы. Наградланыусылар араһынан Башҡортостандан Азат Ҡарасурин һәм Кирилл Михайлов - Дуҫлыҡ ордены, Александр Давидович һәм Ирек Зарипов "Ватан алдында күрһәткән хеҙмәте өсөн" I дәрәжә орденының миҙалы менән наградланды. Ирек Зарипов Владимир Путинға паралимпия спортына ярҙам иткәне өсөн рәхмәт әйтте.

✓Ҡырымда референдум уҙғарыу көндәрендә өфөлөләр Ҡырым һәм Украиналағы туғандаш халыҡтарға теләктәшлек белдереп, БР Профсоюздар федерацияһы уҙғарған акцияларҙа, Башҡортостандың Халыҡтар ассамблеяһы Советы уҙғарған Дөйөм халыҡтар йыйылышында ҡатнашты.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән дәүләт органдары һәм учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә эш өсөн еңел автомобилдәр һатып алыуға сығымдар номативтары раҫланды. Атап әйткәндә, республиканың дәүләт вазифаларын биләүсе түрәләргә двигатель ҡеүәте 250 ат көсөнә тиклем, норматив файҙаланыу срогы биш йылдан да кәм булмаған, хаҡы 1 млн 200 мең һумдан артмаған машиналар алыу рөхсәт ителә. Башҡортостан Президентына, уның хакимиәте етәксеһенә, Дәүләт Йыйылышы Рәйесенә, Премьер-министрға һәм вице-премьерҙарға ташлама яһала. Башҡа вазифа биләүсе хеҙмәткәрҙәргә 900 һәм 750 мең һумдан ҡиммәт булмаған автомобилдәр алырға кәңәш ителә.

*УЯН, УЙЛАН, КЕШЕ!*

**Нәфис һүҙ, матур гөл сәскәһе кеүек, күҙҙәрҙе ҡыҙыҡтыра, моңло ҡурай көйө кеүек, ҡолаҡтарҙы ылыҡтыра, татлы бал кеүек, күңелде ымһындыра, дегәнәктең сәнскеле тажы кеүек, уйға йәбешеп бара. Әгәр ул һөйөү, дәртләндереү һүҙе булһа, йәнде иркәләп, тәнде ләззәтләндереп, аңды албырғатып йөрөй. Әгәр ул тәнҡит һүҙе булһа, үҙе төйгән, йоҡҡан, ҡаҙалған йәндән етешһеҙлек, кәмселек бөтөрөлһә генә, тәндән йолҡоп алып ташланған дегәнәк сәскәһенең ҡаҙауы кеүек, кешене башҡаса борсомай. Шул осраҡта ғына һүҙҙең көсө бар! Шул саҡта ғына һүҙҙең тәьҫире бар! Кешегә екереп, кәмһетеп йә төрләндереп әйткән һүҙҙән бер ниндәй ҙә файҙа юҡ. Ул һүҙҙәр кешелә оторо ҡарышыу тойғолары ғына уята, әйтеүсегә ҡаршы нәфрәт тыуҙыра...**

# ТЕЛЕБЕҘҘӘ - ЯТ ҺҮҘҘӘР,

## фиғелебеҙҙә - ят ҡылыҡ



Мәҫәлән, боронғо йырҙарҙың тапҡыр һүҙҙәре, аһәңле моңо йән төпкөлдәренә үтеп инеп, хисле йәндәрҙе тетрәндереүгә һәләтле. Уларҙы теләһә ниндәй енел-елпе көйҙәргә йырлап та булмай; бер һүҙен генә боҙһаң йә алыштырһаң, йырҙың бөтөн мәғәнәһе үҙгәрә, хатта юғала. Хәҙерге мәғәнәһеҙ йырҙарҙы ниндәй көйгә йырлаһаң да була.

Бөгөн үҙ-ара аралашҡанда хатта ҡарындаштар ҙа бер әсә ауыҙынан ишетеп, аңына тыумыштан һеңгән һүҙҙәрҙе үҙгәртеп һөйләшә. Көндәлек тормошта ауылда ла, ҡалала ла киң таралған "пап", "мам"дар тураһында әйтеп тораһы ла юҡ: хәҙер гәзиз балаһын тыуҙырып, үҫтергән иң ҡәҙерле кешеләр ҙә, ҡайны-ҡәйнәләр ҙә "атай-әсәй" йәки "пап-мам"дар. Ҡартатай һүҙе лә үҙенең ысын мәғәнәһен юғалтыу кисерә. Ҡайны берәүҙәр ул һүҙҙең мәғәнәһен белмәйме, белә торопмо, ейән-ейәнсәрҙәренең үҙҙәренә шулай тип өндәшеүен талап итә. Әлбиттә, ҡартатай олатайҙан яҡыныраҡ, абруйлыраҡ булыуын аңғарткан ҙур мәғәнәгә эйә олпатлы һүҙ. Ләкин, ҡартатай, ҡартәсәй - атайҙың атаһы менән әсәһе, ә олатай, өләсәй - әсәйҙекеләр. Олатай тип хатта атайҙан өлкәнерәк һәр кешегә өндәшәләр ҡайһы бер төбәктәрҙә. Шуға ла улар мәғәнәһенә күрә бүленгәндәр ҙә инде. Өлкәндәр ҡорған хәйләне балалар ҡайҙан белһен? Зарар юҡ, барыбер түгелме ни, тип, телебеҙҙе ярлыландырыуға үҙебеҙ юл ҡуябыҙ. Һүҙҙәрҙең төп мәғәнәһен үҙгәртеп, ят мәғәнә һалғанда, тел ярлылана, көсһеҙләнә, тәрбиәүи тәьҫирен юғалта. Күп башҡорт һүҙҙәре инде юғалған, күптәрен хәҙерге йәштәр түгел, өлкәндәр аңламай, күптәрен ят һүҙҙәр алыштырған. Мин үҙем дә бала саҡта белгән күп һүҙҙәрҙең мәғәнәһен үҙем өсөн яңынан асам, яңынан телемдә тергеҙәм һәм, яңы һүҙ телемә йөкһә, шатланам. Ғәжәп, ләкин ҡалала йәшәгәндәр башҡортса таҙа һөйләшергә, исмаһам, тырышалар, ә ауыл кешеләре, киреһенсә, телдәрен ят һүҙҙәр менән бутайҙар...

**Ата-бабаларыбыҙҙың бөтөн ғәмәлдәре, ҡарарҙары, һүҙҙәре мәғәнәле булған һәм йәшәү рәүештәре менән аҡланған. Хәҙерге бисәләр - ир, ирҙәр бисә булып ҡыланған мәлдә, бөтәһе лә ярай, тип уйлау төптән дөрөҫ түгелдер. "Слабея языком, народ уступает не только свое духовное богатство, но и жизненные пространства", тигән бөйөк М.В.Ломоносов. Был һүҙҙәр илебеҙ кисергән үҙгәрештәргә, юғалтыуҙарға, Рәсәй халыҡтарының бөгөнгө аяныслы хәленә тапҡыр һәм тоғро әйтелгән...**

Тағы ла бер үкендергән күренеш: быуаттар төпкөлөнән килгән тамырҙары менән "сей" башҡорт ире башҡа халыҡтан кәләш алһа йәки башҡорт һылыуы башҡа милләт егетенә кейәүгә сыҡһа, мотлаҡ уларҙың теленә оҡшатып һөйләшергә тырыша. Ниңә уларҙың телендә түгел, ә оҡшатып, тиерһегеҙ. Сөнки кеше бер ваҡытта ла ят телдә үҙенең әсә телендәге кеүек бөтә нескәлектәрен, үҙенсәлектәрен белеп һөйләшә алмай. Мәҫәлән, йыш ҡына "өйгә кереп, йомшаҡ мендәрҙә ҡундым" йәки "ауылға ҡайтып ҡунып китәбеҙ" тигән хәбәрҙе ишеткән бар. Көлкө лә, ҡыҙғаныс та, сөнки тауыҡ ҡына кетәккә осоп менеп ҡуна. Кеше карауат башына менеп ултырып йоҡламай бит. Саф башҡорттарҙа яҫтыҡ - яҫтап ятып йоҡлар өсөн, мендәр - эйәргә һалып менеп ултырыр өсөн. Үҙебеҙҙең әсә телебеҙ тәрән мәғәнәле, кинәйәле, тапҡыр һүҙҙәргә иҫ киткес бай була тороп, уға ят һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләшкән кешене йәлләргәме, әрләргәме?..

Тел - халыҡтың йөҙө һәм йәшәү һәләтенең күрһәткесе. Туған телендә халыҡтың бөтөн тарихы, рухы, тормош тәжрибәһе, аҡылы, көсө, ҡеүәте, дәрте сағыла. "Халыҡты юҡ итәм тиһәң, уны теленән яҙҙыр", тигән аҡыл эйәһе. Халыҡты теленән яҙҙырыуға телләүселәр телде тыуған тамырҙарынан айырып, генетик хәтерҙән юйып, һүҙҙәргә ят мәғәнә һалғанда халыҡ үҙ асылын юғалтыуын белә һәм шул маҡсатта фиҙаҡәр эшләй.

Мәҫәлән, Африкала эльмоло - "балыҡ ашаусылар" ҡәбиләһе кешелеккә ни бары 1930 йылдан билдәле булып, шул осорҙан бирле донъя халыҡтары менән иркен аралашып, 70 йыл арауығында ҡан, тел, йолаларын вайымһыҙ аралаштырып, көслө халыҡтар йоғонтоһона бирелеп, уларҙың йәшәү рәүешен үйһыҙ үҙләштереп, телдәрен дә, ғөрөф-ғәҙәттәрен дә юғалта. Хатта тағы ла 10-20 йылдан ул ҡәбиләнән бер кеше лә ҡалмаясаҡ, ти ғалимдар.

Беҙҙең файҙаға булмаған тағы бер миҫал. Рәсәйҙең Саха-Яҡут Республикаһының төньяғында 1000 кешенән торған юкагирҙар йәшәй. Ул милләттең 50 кешеһе генә үҙ телендә һөйләшә. Әлеге көндәрҙә Сиссилия Вееб исемле итальян ғалимәһе был аҫаба халыҡ теленең әлифбаһын төҙөп, уҡыу әсбаптары баҫтырып, балаларҙы уҡытып, юкагирҙарҙың телен, мәҙәниәтен тергеҙә. Рәсәйҙә йәшәгән милләтте итальян ғалимәһе ҡотҡарып маташа. Ғәжәп, ләкин факт!

Тәбиғәттә һәр бер сәскә үҙ төрөндәге, үҙ төҫөндәге, үҙ еҫендәге үҫемлек булыуы менән ҡәҙерле. Бакуйҙа бер өйөмдә ятҡан үләндәр сәскә түгел - бесән! Шуның кеүек, төрлө телдәрҙәге һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләү - яңы тел белеү түгел, һүҙ бутҡаһы! Төрлө халыҡтар телдәрен беләһең икән, шул телдәрҙе бутамай, таҙа һөйләшә белеү оло ихтирамға лайыҡ! Кемдәрҙер башҡаларға яраҡлашһа, кем менәндер дөйөмләшһә, рәхим итеп, битһеҙләнһен, үҙгәрһен. Ниңә уларға эйәреп, дөйөм һоро көтөүгә ҡушылырға? Халҡыбыҙ яҙмышындағы бөтә еңелеүҙәр һәм юғалтыуҙар шул бәләкәй генә һаналған килешеүҙәр, аҙ ғына тип иҫәпләнгән сигенеүҙәр һәм ғәмһеҙлектең касафаты бит.

Тормош - баҡса: кемдәрҙер унда сүп-сар үрсетә, кемдәрҙер сәскә үҫтерә! Рухи, мәҙәни баҡсабыҙҙа ата-бабаларҙың йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен үрсетһәк, туған телебеҙҙе үҫтерһәк, аҡыллы халыҡ булып, башҡаларҙың иғтибарын һәм ихтирамын яулар инек.

*Ҡорҙаштарым, һеҙгә*
*бер сер әйтәм,*
*(Түрә-ғара миңә ҡушманы):*
*Иблистән дә яман була икән,*
*Бик тырышһа,*
*уның ҡуштаны.*
*Оло йәшкә етеп инанманым,*
*Ышанманым татлы*
*теллегә,*
*Ул йылмайып:*
*"Телең моңло", - ти ҙә,*
*Ҡороҡ һала һаман телемә.*
*Татлы телле*
*тырышһа ла бер ни*
*Ҡыла алмаҫ ине яңғыҙы.*
*Үкенескә, унда ялсылыкта*
*Аумаҡай бар -*
*халкым аңһыҙы.*

**Урал МОСТАФИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда муниципаль район хакимиәттәре башлыҡтары менән яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек, мал ҡышлатыу барышы һәм яҙғы ташҡыны үткәреү мәсьәләләре буйынса зона кәңәшмәләре башлана. БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар 2014-2016 йылдарға төбәк агросәнәғәт комплексы үҫеше стратегияһын һәм алдағы яҙғы сәсеүҙе үткәреү тактикаһын тикшерәсәк.

✓Рөстәм Хәмитов үҙенең ҡарары менән Башҡортостан Президенты ҡарамағындағы Коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса совет составына һәм уның президиумына үҙ хакимиәтенең етәксе урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтовты һәм БР Йәмәғәт именлеге ведомство-ара советы секретары Рәмил Исҡужинды индерҙе. Бер үк ваҡытта Совет составынан президент хакимиәте башлығының элекке урынбаҫары Фидус Ямалтдиновты һәм вице-премьер Марат Мәһәҙиевты сығарҙы, тип хәбәр ителә республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт агентлығы сайтында.

✓Затонға Ағиҙел аша икенсе күпер төҙөлөшө 2013 йылдың октябрендә башланған. Күпер оҙонлоғо 942 метр тәшкил итәсәк төҙөлөш ваҡытында автомобилдәр хәрәкәтен сикләү планлаштырылмай. Объектты 2016 йылда файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Күпер Ағиҙел йылғаһы аша әле эшләп килгән автомобилдәр күпере менән йәнәш, ағым буйынса 40 метрға юғарыраҡ урынлашасаҡ. Күперҙә өс буйлы хәрәкәт ойоштороу планлаштырыла. Был объект көнбайыш йүнәлешендә ҡаланан сығыуҙы кәметергә, М-5 "Урал" һәм М-7 "Волга" федераль трассалар араһында бәйләнеш тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк.

✓29 мартта, Асыҡ ишектәр көнөндә, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты әҙәбиәт буйынса Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерлек буйынса бушлай уҡыуҙар уҙғара. Консультацияны рус әҙәбиәте кафедраһы ойоштора. 11-се синыф уҡыусылары менән тәжрибәле методистар - вуз экспертары эшләйәсәк. Уҡыуҙар Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы урамы, 3а адресы буйынса университеттың 3-сө корпусында, 213-се бүлмәлә (14-18 сәғәттәрҙә) уҙасаҡ. Ғаризалар электрон почта (kafedralit@gmail.com) йәки (347) 273-38-81 телефоны буйынса ҡабул ителә.

**“Башинформ”дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕР ЙЫЛДАН... хосусилаштырыу тамамлана

**2015 йылдың 1 мартында дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фондында булған торлаҡ биналарын хосусилаштырыу тәртибендә граждандарҙың шәхси милкенә бушлай күсереү программаһы тамамлана. Күптәр был мөмкинлек менән файҙаланып ҡалһа, әлегәсә бүлмәләрҙә йәиһә фатирҙарҙа ордер йәки социаль ҡуртым килешеүе буйынса йәшәүселәр ҙә бар.**

Башҡортостан Республикаһы буйынса Росреестр идаралығы етәксеһе И. Шеляковтың һүҙҙәренә ҡарағанда, 1998 йылдан алып республикала торлағын хосусилаштырыу хоҡуғы менән 650 мең самаһы кеше файҙаланған (хосусилаштырылырға тейешле торлаҡтың 80 проценты самаһы). Ә инде һаманғаса ошо мәсьәләне хәл итмәйенсә һүҙып йөрөүселәргә уйларға ни бары бер йыл ғына ваҡыт ҡалды. Өфөлә бындай хеҙмәтте баш ҡаланың "Күсемһеҙ милек үҙәге" муниципаль унитар предприятиеһы күрһәтә. Республиканың район-ҡала халҡы иһә үҙҙәренең муниципаль район йәки ҡала округы хакимиәтенә мөрәжәғәт итә ала. Хосусилаштырыу мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе органдар мөрәжәғәт итеүселәргә ниндәй документтар кәрәклеген аңлатасаҡ (аныҡлап әйткәндә, мотлаҡ рәүештә торлаҡ бинаға техник план һәм кадастр паспорты кәрәк. Техплан булмаған осраҡта, уны кадастр инженерҙарынан эшләтергә мөмкин. Уның нигеҙендә "Росреестрҙың федераль кадастр палатаһы" ФДБУ-һы филиалында кадастр паспорты биреләсәк).

Граждандан ғариза һәм кәрәкле документтар алынғас, урындағы үҙидара органы йәки учреждениеһы уның менән торлаҡты шәхси милеккә тапшырыу тураһында килешеү төҙөй. Һуңынан был килешеү Росреестрға тапшырылып (быны Күп функция башҡарыу үҙәктәре аша ла эшләп була), милек хоҡуғының күсеүе теркәлә. Торлаҡтың шәхси милеккә күсеүе тураһындағы таныҡлыҡты документтар тапшырғандан һуң 18 календарь көнө үткәс алырға мөмкин.

Шулай уҡ граждандарҙың милкенә торлаҡ фонды объекттары хосусилаштырыу тәртибендә күскәндә айырым шәхестең хоҡуғы тураһында Берҙәм дәүләт хоҡуҡ реестрынан (ЕГРП) күсемһеҙ милек һәм уның менән алыш-биреш итеүгә хоҡуҡтары тураһында күсермә (выписка) талап ителә. Был документ Росреестр тарафынан бирелә. ЕГРП-нан күсермә алыу өсөн түләү РФ-ның бер субъекты территорияһында һәм бер кешегә 500 һум тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта был күсермәне талап итеүсе орган үҙенең һорауы буйынса Башҡортостан Республикаһы буйынса Росреестр идаралығынан уны үҙ-ара хеҙмәттәшлек сиктәрендә граждандың ҡатнашлығынан тыш үҙаллы һәм бушлай алыу мөмкинлегенә эйә.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# "ЕМ БИРЕГЕҘ...

## беҙ уны үҙләштерербеҙ!"

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева ҡатнашлығында ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлауға арнап үткәрелгән матбуғат конференцияһында был һүҙҙәр ябай һүҙ булып ҡына түгел, ә халыҡҡа мөрәжәғәт булып та һәм бик урынлы яңғыраны.**

Һәр кемебеҙ ҡулланыусы булһаҡ та, белем, тормош кимәленә ҡарап, төрлө баҫҡыста торабыҙ. Ғиләме еткәндәр үҙ хоҡуғын яҡлай йәки яҡлауҙы талап итеп, махсус ойошмаларға мөрәжәғәт итһә, күпселек үҙ хоҡуғын яҡларға ең һыҙғанып тотона ла, төрлө тупһаларҙы тапай-тапай йәки хеҙмәт күрһәтеүсенең ваҡыт һуҙыр өсөн биргән яуаптарына, буш вәғәҙәләренә ышанып, ахырҙа ялҡып, башлаған эшен осона сығармайынса, ҡул һелтәп ҡуя. Баш ҡалала 2006 йылдан ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса төрлө белешмәләр нәшер ителһә лә, тормош үҙе яңынан-яңы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе талап итә. Шуға ла ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау менән туранан-тура шөғөлләнеүселәр өсөн өйрәнеү, эҙләнеү өлкәһе тап ҡулланыусылар ташлаған "ем"гә бәйле, тиергә мөмкин.

Ошо матбуғат конференцияһында ла журналистарҙың кеҫә телефондарына түләүҙәр һәм иҫәптәге аҡсаларҙың тиҙ арала юҡҡа сығыуы, ә инде тикшерә башлаһаң, үҙең дә белмәйенсә, операторҙың төрлө хеҙмәттәренә яҙылыуыңды асыҡлауың, был осраҡта нисек итеп ҡулланыусы хоҡуғын яҡлау мөмкин икәнлеге буйынса бирелгән һорауы тап сираттағы "ем" булып торҙо ла инде. Сөнки торлаҡ-коммуналь, хеҙмәтләндереүҙең төрлө тармаҡтары, түләүле медицина хеҙмәте, банктарҙан кредит алыусылар, йорт төҙөлөшөнә өлөшсө булып инеүселәр, финанс пирамидаларға ҡапҡанына ҡабыусылар һ.б. хоҡуҡтарын яҡлау хәҙер ғәҙәти күренешкә әйләнеп, былтыр мөрәжәғәт итеүселәр һаны 9 меңгә етһә лә, мобиль телефон селтәрҙәре операторҙарының хеҙмәтләндереүе буйынса бер генә дәғүә лә булмаған.

Әлеге ваҡытта ҡулланыусылар үҙ хоҡуҡтарын яҡлау буйынса Күп функция башҡарыу үҙәктәренә мөрәжәғәт итә ала. Был инде граждандарҙың оҙон сираттарҙа тороу проблемаһын бөтөрөүгә, хеҙмәтләндереүҙең сифатын яҡшыртыуға бер аҙым. Өфөнөң Яңы күпер һәм Интернационал урамдарына урынлашҡан шундай үҙәктәр аҙнаның алты көнөндә лә эшләй. Уларҙа граждандарҙың ғаризаларын, мөрәжәғәттәрен яҙма рәүештә алып ҡалалар һәм артабан ҡаланың халыҡты социаль яҡлау идаралығының ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау бүлеге юристарына йүнәлтәләр. Бындай юридик ярҙам Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында түләүле булһа, Башҡортостанда ул бушлай күрһәтелә. Шулай уҡ ҡулланыусыларҙың белемен күтәреү маҡсатында төрлө саралар уҙғарыла, урындарға сығып консультациялар бирелә, күргәҙмә әсбап таратыла. Быйыл Бөтөн донъя ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау көнө алдынан баш ҡала беренсе тапҡыр "Грамоталы ҡулланыусы - өсөнсө быуын халыҡ университеты тыңлаусыһы" конкурсы үткәрелде. Мәҙәниәт йылы сиктәрендә беренсе тапҡыр "Ҡулланыусы юморы йәки хеҙмәтләндереү һәм сауҙа өлкәһендәге көлкөлө хәлдәр" тигән конкурс иғлан ителгән. Уның маҡсаты - халыҡты хеҙмәтләндереү мәҙәниәтен үҫтереү. Март һуңында "Ҡулланыусы ышаныс" знагына конкурсҡа ла йомғаҡ яһаласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЯҘҒЫ КӨН ЫШАНЫСҺЫҘ

**Башҡортостанда алдағы көндәрҙә насар һауа торошо көтөлә, тип хәбәр итә Башгидромет. Сираттағы циклон менән төбәккә епшек ҡар киләсәк.**

- Беҙҙә тотороҡһоҙ һауа торошо көтә. Бындай һауа торошонда елдең ҡапыл көсәйеүе - ғәҙәти күренеш. Ошо көндәрҙә республикала ел көсө секундына 23 метрға етте. Ҡар һәм ҡар ҡатыш ямғырҙар көтәбеҙ, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына Башгидрометтың баш синоптигы Анна Козаева. - Беҙҙең алдағы прогноздарға ярашлы, һауа торошо марттың икенсе-өсөнсө декадаһында тотороҡһоҙ буласаҡ: хәҙер беҙ күҙәткән яуым-төшөм йылы һәм һыуыҡ тулҡындар менән алышынып килә. Уртаса тәүлек температураһы күтәрелә. Ниндәйҙер айырыуса һыуыҡтарҙы көтмәйбеҙ, һауа температураһы, һис шикһеҙ, йылынасаҡ. Аяҙайтҡанда тундырыуы ихтимал, тимәк, боҙлауыҡ осраҡтары шулай уҡ һаҡланасаҡ. Ваҡыты-ваҡыты менән ел көтөлә, әммә әҙерәк көс менән - секундына 18 метрға тиклем...

Баш синоптик әйтеүенсә, Башҡортостанда апрелдә һауа температураһының норманан ике градусҡа юғарыраҡ булыуы көтөлә, яуым-төшөм иҫәбе лә шуға тиң. Һауа температураһы мартта шулай уҡ уртаса йыллыҡ күрһәткестәрҙән юғарыраҡ булды. Былар барыһы ла яҙҙың иртә, әммә тотороҡһоҙ килеүе тураһында һөйләй.

## АЛДА - ИМТИХАНДАР

**Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырасаҡ 24355 кеше теркәлгән. Уларҙың күпселек өлөшөн мәктәпте быйыл тамамлаусылар тәшкил итә. Улар 23 мең тирәһе иҫәпләнә. Ҡалғандары - үткән йылдарҙағы сығарылыш уҡыусылары. Был исемлеккә уҙған йылдарҙа йомғаҡ аттестацияһын үтә алмаған уҡыусылар ҙа ингән.**

Предметтар һайлауға килгәндә, мотлаҡ математика һәм рус теленән тыш, беренсе урында - йәмғиәт белеме фәне. Был дисциплинаны 14650 ҡатнашыусы һайлаған. Физика фәнен - 9229, биологияны - 6455, тарихты - 5975 һәм химия фәнен 5243 кеше һайлаған.

БР Мәғариф министрлығының дөйөм белем биреү һәм дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы бүлеге баш белгес-эксперты Жанна Минекәева билдәләүенсә, сығарылыш уҡыусылары имтихандарҙы Берҙәм дәүләт имтихандарын биреү буйынса 118 пункттың береһендә тапшырасаҡ. Берҙәм дәүләт имтихандарында ҡатнашыусылар кластарға үҙҙәре менән тик паспорт һәм рөхсәт ителгән өҫтәмә яйланмалар, материалдар ғына индерә ала. Шәхси әйберҙәрҙе һаҡлауға тапшырырға тура киләсәк. Быйыл бөтөн Берҙәм дәүләт имтихандарын биреү пункттары видеокамералар менән йыһазландырылған, улар һынау ваҡытында онлайн режимында эшләйәсәк.

Имтихандар тапшырыуҙың төп ағымы 26 майҙа башланасаҡ, беренсе дисциплиналар - география һәм әҙәбиәттән. Һынауҙарҙы ваҡытынан алдан тапшырыу 21 апрелдә старт ала.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2013 йылда Өфөнөң депутаттар корпусы 14 ултырыш уҙғарған, унда 222 ҡарар ҡабул ителгән. Был хаҡта ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко үткән йылға ҡала Советы эше тураһындағы докладта хәбәр итте.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең сираттағы автоуҙышы Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондары буйлап старт алды. 24 мартта китап продукцияһының кинәйтелгән күргәҙмә-сауҙаһы Салауат районының Малаяҙ ауылында, 25 мартта - Дыуан районының Мәсәғүт ауылында, 26 мартта - Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында, 27 мартта - Ҡыйғы районының Үрге Ҡыйғы ауылында, 28 мартта - Балаҡатай районының Яңы Балаҡатай ауылында ойоштороласаҡ.

✓Башҡортостанда 2013 йыл йомғаҡтары буйынса "БР иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсы иғлан итилде. Төрлө номинациялар буйынса материалдар Өфө ҡалаһы, Тукай урамы, 46 адресы буйынса республика Йортонда "Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәмектәре Советы" ассоциацияһына йәки asmo@bashkortostan.ru электрон адресына тапшырыла. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн ғаризалар 10 апрелгә тиклем ҡабул ителә.

✓25 мартта Башҡортостанда Рәсәй Президентының ҡабул итеү бүлмәһендә эшҡыуарҙарҙың законлы хоҡуҡтары һәм ҡыҙыҡһыныуҙары һорауҙары буйынса граждандарҙы ҡабул итеү уҙасаҡ. Эшҡыуарҙарҙың һорауҙарына бизнес-омбудсмен Рафаил Ғибәҙуллин яуап бирәсәк. Ҡабул итеү 14 сәғәттә башлана.

✓Силәбе өлкәһе башҡорттарын, әлеге ваҡытта Өйәлге ҡасабаһында торған Салауат Юлаев һәйкәленең (Өфөләге һәйкәлдең бәләкәйтелгән күсермәһе) яҙмышы борсой. Арғаяш районы башҡорттары ҡоролтайы йәмғәт ойошмаһы ултырышында һәйкәлде Арғаяш ауылына күсереү тураһында районддың депутаттар советына һәм Өйәлге ҡасабаһы шифаханаһы генераль директоры Александр Мицуковҡа мөрәжәғәт хаты ҡаралды. Һәйкәлдең район үҙәгендә урынлашыуы ауылды мәҙәни үҙәккә әйләндерергә, ә иң мөһиме, скульптураны яҡшы хәлдә тоторға булышлыҡ итәсәк, тип иҫәпләй арғаяштар.

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

**Упҡын шул тиклем тәрән, уға олатайҙар ҙа, атайҙар ҙа, ейәндәр ҙә ҡолай: медицина фәндәре докторы, РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Психиатрия фәнни-тикшеренеү институтының Мәскәү бүлексәһе етәксеһе А. В. Немцов мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә, алкоголгә һәм уға бәйле башҡа сәбәптәр арҡаһында көн һайын 2 мең самаһы кеше үлә!**

# КӨНӨНӘ ИКЕ МЕҢ КЕШЕ...

## эсеп үлә

Оҙаҡ ваҡыттар алкоголь проблемаһы менән шөғөлләнеп, беҙ шуға тағы ла нығыраҡ инанабыҙ: халҡыбыҙҙы ялмап алған эскелек үҙенән-үҙе килмәгән, ул яһалма рәүештә индерелгән. Бөгөн иһә йәмғиәтебеҙ ломехуза ҡорттары ингән ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә. Улар тураһында Г. Шовен үҙенең "От пчелы до гориллы" тип аталған китабында бына нимә тип яҙа: "Ломехузалар ҡырмыҫҡа иләүенә инеп, йомортҡа һала, ә бер нимә уйламаған ҡырмыҫҡалар сит тоҡомдо туйындыра бирә. Шул арала аппетиты шәп ҡарышлауыҡ үҙенең хужаларын да ашай башлай. Уңайы тура килгәндә, улар ҡырмыҫҡа ҡарышлауыҡтарын да ашап ҡуя. Әммә хужалар уларҙы ҡыумай, сөнки ломехуза һәр саҡ арҡты аяғын күтәреп, трихомаларын - ҡырмыҫҡа ҡомһоҙланып ялаған еүеш төксәләрен сығарырға әҙер генә тора. Ҡырмыҫҡалар бер хәсрәтһеҙ төксәләр бүлеп сығарған наркотик шыйыҡсаны эсә. Трихомаларҙың бүлендегенә өйрәнеп, эшсе ҡырмыҫҡалар үҙҙәрен генә түгел, тотош иләүҙе үлемгә дусар итә. Улар үҙҙәренең бәләкәй генә донъяһы, үлгәнсе бил бөгөүҙе талап иткән меңәрләгән эше тураһында бөтөнләй онота; улар өсөн үлемгә илтеүсе һәм бурыс хаҡында оноторға мәжбүр итеүсе ҡөһәрле трихомаларҙан башҡа бер нәмә лә юҡ. Тиҙҙән ҡырмыҫҡалар үҙҙәренең ер аҫты галереяһы буйлап хәрәкәт итә алмай башлай: яҡшылап туҡландырылмаған ҡарышлауыҡтары гәрип ҡырмыҫҡалар булып үҫә. Бер аҙ ваҡыттан һуң иләү бөтөнләй көсһөҙләнә һәм юҡҡа сыға, ә ломехуза ҡорттары яңы ҡорбан эҙләп, күрше иләүгә юллана..."

Кешелек йәмғиәтендәге былдай "корттар" хеҙмәтте бүлешеп башҡара: берәүҙәр наркотик шыйыҡса менән тәьмин итә, икенселәр үҙ ҡарамағында булған матбуғат, телевидение һәм башҡа киң мәғлүмәт сараларын файҙаланып, хеҙмәт һөйөүсән "ҡырмыҫҡа"ларҙы идеологик яҡтан эшкәртә, өсөнсөләр... туҡтауһыҙ байрамдар уйлап сығара. Тағы ла эсергә, эсергә, эсергә... Шулай итеп, бик күптәрҙә алкоголгә психик һәм физиологик бәйлелек барлыҡҡа килә, уларҙың күптәре алкоголь ҡулланыу һөҙөмтәһендә һәләк була, төрмәгә эләгә, эшен, ғаиләһен, матур атын юғалта... "Байрамдарҙы мин һуғыш көткән, ҡара болот ябырылған кеүек ҡаршылайым, - тип яҙа беҙгә республиканың ябай бер ауыл кешеһе. - Бер генә байрам да үлемһеҙ тамамланмай. Байрамдарҙа кемделер үлем көтә. Миңә байрамдар ҡурҡыныс бер нәмә кеүек тойола. Эш көндәрендә кешеләр эшләй һәм ял итә, байрамдарҙа уларҙың күпселеге йыртҡыс хайуанға әйләнә".

Эскелектең ҡот осҡос эҙемтәләрен йөрәге аша үткәргән айыҡ кешеләр төркөмө Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовҡа, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачевҡа үҫеп килеүсе быуынды, генетик ҡеүәтте һаҡлап ҡалыу хаҡына үҙебеҙҙең төбәктең алкоголгә ҡаршы законадарын ҡабул итеүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Беҙ, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ла, уларҙың үтенесенә ҡушылабыҙ һәм теләктәшлек белдереп, үҙебеҙҙең түбәндәге тәҡдимдәребеҙҙе еткерәбеҙ:

1. Алкоголь һатыу тураһындағы урындағы ҡануниәткә төҙәтеүҙәр индергәндә, уларға ярашлы, урындағы депутаттар йәки граждандар сходы үҙҙәре йәшәгән ауыл территорияһында алкоголь һатыуҙы тыйыу тураһында ҡарар ҡабул итә аласаҡ. Былдай төҙәтеү 2012 йылдан Силәбе өлкәһендә, Тыва Республикаһында, Саха-Яҡут Республикаһында (37 ауыл советы референдум үткәреп, үҙҙәрендә алкоголь һатыуҙы тыя), 2013 йылдан Приморье крайында ғәмәлдә.

2. Башҡортостан Республикаһында алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыуҙы киске сәғәт 7-нән иртәнге сәғәт 11-гә тиклем туҡтатырға. Былдай төҙәтеү Рәсәйҙең 40 төбәгендә ғәмәлдә: Әстерхан, Санкт-Петербург, Чечняла сәғәт көндөҙгө икенән дүрткә тиклем, Яҡутстанда көндөҙгө сәғәт икенән киске етегә тиклем һ.б.

3. Башҡортостан Республикаһы территорияһында мәктәптәрҙә сығарылыш тантаналары булғанда; 23 февралдә, 8 Мартта, 1 Майҙа, 9 Майҙа, 1 июндә, 12 июндә, 27 июндә, Ҡала көнөндә, 1 сентябрҙә, 4 ноябрҙә алкоголде ваҡлап һатыуҙы тыйырға. Былдай төҙәтеүҙәр Рәсәйҙең 30-ҙан ашыу төбәгендә ғәмәлдә: Чечняла, Сыуашстанда, Липецк өлкәһендә, Яҡутстанда, Пермь крайында һ.б.

4. Талиптар ятаҡтары урынлашҡан биналарҙа, улар эргәһендәге 500 метр радиустағы территорияла, шулай уҡ күп фатирлы йорттарҙа урынлашҡан сауҙа объекттарында алкоголь продукцияһын һатыуҙы тыйырға. Былдай төҙәтеү Рәсәйҙең 10 төбәгендә ғәмәлдә: Пермь крайында, Яҡутстанда, Владимир өлкәһендә һ.б.).

5. Башҡортостан Республикаһында етештерелгән һәм ситтән индерелгән алкоголь продукцияһының сауҙа маркаларындағы атамаларҙа һәм график образдарҙа милли һәм мәҙәни мотивтарҙы ҡулланыуҙы тыйырға.

Башҡортостан ауыл-ҡалаларының йәмәғәт урындарын тәүлек әйләнәһенә спиртлы эсемлектәр, һыра һатыусы киоскылар, магазиндар баҫҡан. Был үҙе үк геноцид сәйәсәтенең бер өлөшө булып тормаймы ни? Шул рәүешле халҡыбыҙҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре аяҡ аҫтына һалып тапалмаймы, халыҡты һалып тороусы йолаларыбыҙ, ғөрәф-ғәҙәттәребеҙ емерелмәйме? Ни өсөн һеҙ, балалыҡ һәм йәштәр мәсьәләләре менән шөғөлләнеүселәр, өндәшмәйһегеҙ? Ата-әсәләр, өләсәйҙәр, олатайҙар, ниңә һеҙҙең тауышығыҙ ишетелмәй? Нимә көтәбеҙ? Нимәгә өмөтләнәбеҙ?

Беҙҙең хатта көрәш яланында яңғыҙ ҡалғанда ла ҡул ҡаушарып ултырырға хоҡуғыбыҙ юҡ. Атай-олатайҙар хаҡындағы хәтер һәм балаларыбыҙҙың киләсәге тураһындағы уйҙар беҙҙе бергә тупларға тейеш!

Баймаҡ, Бәкалы, Йылайыр райондарынан 1000-гә яҡын кеше БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай етәкселеге исеменә алкоголгә ҡаршы закон ҡабул итеүҙе һорап, коллектив мөрәжәғәт ебәрҙе. Улар өлгөһөнә ҡушылайыҡ.

**Марат АБДУЛЛИН,**
**Роберт ДӘҮЛӘТШИН,**
**Ринат ЗӘЙНУЛЛИН,**
**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте етәкселәре.**

*СӘЙӘСӘТ*

# ҠЫРЫМ БЕҘҘЕКЕ!

**Уҙған йәкшәмбе Ҡырым автономияһы статусы буйынса референдум үтте. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ихтыяр белдереүселәрҙең 96,77 проценты төбәктең Рәсәйгә ҡушылыуы өсөн тауыш бирҙе.**

Был ваҡиғаға, мәғлүм булыуынса, Украинала барған сәйәси хәл этәргес булып торҙо. 22 февралдә илдә власть алмашыны һәм Украина Радаһы дәүләт башлығын идара итеүҙән ситләтеп, Конституцияға үҙгәрештәр индерип, 25 майға һайлауҙар билдәләне. Шул уҡ ваҡытта Украинаның көнсығышындағы, көньяғындағы ҡайһы бер өлкәләр, шулай уҡ Ҡырым да Раданың ҡарарын законға ярашлы тип тапманы һәм төбәктәренең артабанғы яҙмышын референдумдар үткәреп хәл итергә ҡарар ҡылды.

Референдум үтте, әммә уның легитимлығын Рәсәй менән Ҡырымдың үҙенән башҡа бер генә ил дә, дәүләт тә таныманы. Украинаның яңы властары уны аннексия тип баһалай. Әммә Рәсәй Президенты Владимир Путин, "уны үткәреү тулыһынса халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларына, БМО Уставына тап килде һәм, атап әйткәндә, билдәле Косово прецедентын иҫәпкә алды. Шул уҡ ваҡытта ярымутрау халҡына ирекле ихтыяр күрһәтеү һәм үҙбилдәләнеш мөмкинлеге гарантияланды", тип белдерә. БМО-ның Именлек советы Ҡырым ярымутрауының статусы тураһындағы референдум һөҙөмтәләрен легетим түгел тип иғлан итеү тураһында резолюция проекты әҙерләп, уны 13 ағза ил хуплап, бары тик Ҡытай ғына яуап биреүҙән тотҡарлангайны, Рәсәй проект резолюцияһына ойошманың даими ағзаһы булараҡ вето һалыу хоҡуғын файҙаланды. Был йәһәттән Рәсәй Федерацияһының БМО-лағы даими вәкиле Виталий Чуркин, "резолюция авторҙарының философияһы халыҡ-ара хоҡуҡтың нигеҙ принцибының береһенә - БМО-ның Уставындағы 1-се статьяла нығытылған халыҡтарҙың тиңлек һәм үҙбилдәләнеш принцибына ҡаршы килә", тип белдерҙе.

Ә был ваҡытта Ҡырымдың Юғары советы сираттан тыш пленар ултырышында "Ҡырымдың бойондороҡһоҙлоғо тураһында" ҡарар ҡабул итеп, Рәсәй Федерацияһына республиканы үҙ составына алыуын һорап мөрәжәғәт итте. 18 мартта иһә Рәсәй Президенты "Ҡырым Республикаһын таныу тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, "Ҡырым үҙ аллы һәм бойондороҡһоҙ дәүләт итеп танылды". Шул уҡ көндө ил башлығы Дәүләт Думаһы депутаттары, етәкселек алдында сығыш яһаны һәм Ҡырымдың - Рәсәй Федерацияһының үҙ аллы субъекты, ә Севастополь ҡалаһының федераль әһәмиәттәге ҡала булараҡ, Рәсәй составына ҡабул ителеүе тураһында белдерҙе. Был тарихи ваҡиға шунда уҡ ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйыу менән нығытылды.

Ҡабат референдумға урап ҡайтҡанда, 30 мең ҡырым татары Рәсәйгә ҡушылыуға ҡаршы тауыш биргән. Быны Ҡырымдың беренсе вице-премьеры Рөстәм Тимерғәлиев бына нисек аңлата: "Был халыҡ 1944 йылғы депортация һөҙөмтәһендә күпте күреп, күпте кисергән. Шул ваҡытта бер нисә тиҫтә мең ҡырым татары Уралға, Урта Азияға сығарылған. Шуға күрә бигерәк тә оло быуын кешеләре Рәсәйҙә ҡабул итә алмай һәм уны халыҡтар төрмәһе тип иҫәпләй. Беҙ улар өсөн йәлап ҡына күп милләтле, диненә, йолаларына, мәҙәниәтенә ҡарамаҫтан, бар халыҡтарҙы ла хуплаған һәм яҡлаған яңы Рәсәйҙе асабыҙ".

Хәл-ваҡиғаларҙың артабан нисек боролош алырын ваҡыт күрһәтер, ә әлегә һәр кем һығымтаны үҙе яһаһын.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ирен ярылғанда

❖ Йоҡлар алдынан ирендәргә бал, ҡыяр йәки кишер һуты һөртергә.

❖ Ҡырылған алмаға аҡ май ҡушып яһалған ҡатнатма ла ирендәге йәрәхәтте дауалай.

### Хәл бөтһә

❖ Алоэ япрағын турап (туралған көйө ҡуләме ярты стакан булырға тейеш), 3/4 стакан бал менән ҡушырға һәм 3 көн ҡараңғы бүлмәлә тоноторға. Шунан 3 стакан ҡыҙыл шарап ҡушып, тағы ла бер тәүлек төнәтергә. Көнөнә 2-3 мәртәбә ашар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә.

### Сөйәл

❖ Башлы һуғанды ҡабығынан таҙартып, ике өлөшкә бүлергә һәм банкаға һалып, өҫтөнә сыҡҡансы аш һеркәһе ҡойорға, бер тәүлеккә йылы урынға ҡуйырға. Шунан һуғандың һәр ҡатламын айырып алырға ла, сөйәлдәргә ябырға, сепрәк менән бәйләргә. Һуған урынына ҡабығын алырға ла ярай, әммә уны һеркәлә 2 аҙна ебетергә кәрәк.

❖ Һөйәге алынған ҡара емеште бешереп иҙергә лә, эҫе килеш сөйәлгә ябырға, һыуынғансы тоторға. Сөйәл бөткәнсе эшләнәгеҙ ҙә була.

### Тымау

❖ Үксәгә гәрсисле ҡағыҙҙар йәбештереп, йомшаҡ сепрәк менән бәйләп ҡуйырға кәрәк. Ҡағыҙҙарҙы алғас, 1-2 минут ишекле-түрле шәп-шәп атларға кәрәк кәрәк. Йоҡларға ятыр алдынан эшләнәң бигерәк файҙалы.

❖ Тымау тейеп барған осорҙа ауырымаҫ элек көн һайын берәр өлөш һарымһаҡ ашарға.

❖ Ойоҡбаштың эсенә ҡоро гәрсис порошоғы һалып кейергә була.

❖ Тымау тейҙереп, йыш ауырыһағыҙ, башлы һуғанды иҙеп, һутын танауға тамыҙырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠЫҘҒА - ҠАНАТ...
## ир балаға - бот

**Ит бүлеүҙә лә билдәле бер тәртип һаҡланған. Ҙур ҡунаҡ йыйылғанда иттең иң тәмле ере йорт хужаһына һәм оло ир-егеттәргә бирелә. Ә ғаилә эсендә итте өлөштәргә атай бүлә һәм ғаилә ағзаларының ҡулына тоттороп сыға.**

Ит бүлгән саҡта һамаҡтар ҙа һамаҡланған. Улар башҡорт халыҡ ижады өлгөләрендә лә осрай. Мәҫәлән, "Ҡуңыр буға" эпосының ҡайһы бер варианттарында аҡһаҡал һарыҡ түшкәһен бүлә һәм иттең ҡайһы өлөшө кемгә тейешлеген түбәндәгесә билдәләй:

*Баш һөйәге - башлауға,*
*Тулараһы - ташлауға.*
*Һум иттәре - ашауға,*
*Һөйәк тотһаң - кимерерһең,*
*...Еләктәрен һурырһың...*
*Башын алыр атайың,*
*Муйынын алыр әсәйең.*
*Ботон алыр ағайың,*
*Ҡарындашың - аяғын,*
*Еңгәң алыр - тояғын...*

Ҡош итен бүлеүҙең дә үҙ тәртибе бар:

*Түҙгәнгә түш булыр,*
*Түҙмәгәндәр буш булыр.*
*Ир кешегә - баш булыр,*
*Ҡатынға - муйын тейер,*
*Кимереп туйын, тиер.*
*Кемдәр алыр ҡанатын?*
*Ҡыҙҙар алыр ҡанатын.*
*Егеттәргә бот тейер...*

Ҡыҙҙарға ҡанат биреү - уларҙың кейәүгә сығып, атай йортонан китәсәгенә ишара (ҡыҙға - ҡанат), улдарға - бот, улар хужалыҡта төп ярҙамсы; баш - ғаилә башлығына, ә хужабикәгә муйын йәки ҡойроҡ эләккән. Ҡатын муйын кеүек, ирҙе үҙе теләгән яҡҡа бора ала, тип иҫәпләгәндәр. Ә ҡойроҡ өлөшө ғаиләгә, йортҡа тоғролоҡ, йәғни хужабикә булыуҙы билдәләгән. Шулай итеп, ит бүлеү йолаһында ла ғаилә ағзаһының үҙ бурыстары яңынан иҫкә төшөрөлгән.

Башҡорттар яҙлы-көҙлө итте йыш ашамаған. Шуға ла һуғым ашы, баш ашына саҡырышыуҙар ҡышын, ит мул саҡта үткәрелгән байрамдар булып тора. Йәй эре мал ҙур байрамдар, табындар көтөлгәндә йәки өмәләр үткәрелгәндә генә һуйылған. Шулай уҡ йәй кемдер мал һуйһа, итте яҡын туғандарына, күршеләренә бүлеп таратыу йолаһы ла булған. Үҙ сираттарында, улар мал һуйғас, был өлөштө кире ҡайтарып биргән. Көндәр эҫе торғанда һарыҡ һуйылған, сөнки уны оҙаҡ һаҡламай, тиҙ генә ашап бөтөү мөмкинлеге булған.

**Эльза МИҢРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ЙӘНҺҮРӘТТЕҢ ДӘ...
## яҡшыһы, яманы була

**Кескәйҙәрҙең барыһы ла йәнһүрәт ҡарарға ярата, был улар өсөн сихри, мөғжизәле бер донъя. Ваҡытты сикләмәһәң, улар зәңгәр экран алдында көндәр буйы ултырырға ла әҙер. Шулай ҙа һәр ата-әсә балаһының ниндәй йәнһүрәт ҡарауына, уның йөкмәткеһенә иғтибар бүлергә тейештер. Кескәйҙәр бит һәр нәмәне отоп алырға ғына тора, йәнһүрәт ҡарағанда ла улар беҙ әһәмиәт бирмәгән күренештәрҙе лә иғтибарынан ситтә ҡалдырмай. Ә һуңынан инде үҙенең яратҡан персонажына оҡшарға тырыша, һәр хәрәкәтендә, телмәрендә уны ҡабатлай башлай.**



Йәнһүрәт баланың күңелен асырға ғына түгел, ә уны ниндәйҙер кимәлдә үҫтерергә, тәрбиәләргә тейеш. Ә бөгөнгө заман йәнһүрәттәре баланы үҫтерә, нимә яҡшы, нимә насар икәнен айырырға өйрәтә аламы? Үҙем берике тапҡыр "Дисней" каналына баҫып ҡарағаным булды: экрандағы дүрткел башлы, ҙур күҙле, ыржайған тешле, тупаҫ-мупаҫ һөйләшкән йән эйәләрен күреп, тиҙ генә һүндерә һалам. Бөтә нәмәне отоп алырға әҙер генә торған балам ошоларҙы ҡарар ҙа, үҙе лә шулай ҡылана башлар кеүек тойола миңә. Бөгөн бик модалы "Маша һәм айыу" йәнһүрәте лә ниңәләр күңелгә ятмай. Үҙ һүҙле, еңмеш Маша гел эш боҙа, бахыр айыу уның бойороҡтарын үтәүҙән бушай алмай. Күп ата-әсәләр әйтеүенсә, бәләкәстәр ошо йәнһүрәтте иҫе китеп ҡарай, һуңынан үҙҙәре Маша булып ҡылана икән. Кескәйҙәрҙең Маша роленә инеүе дөрөҫмө? Тиҙҙән улар ҙа теләгәнен уныңса талап итә башламаҫмы?

Әлбиттә, кескәйҙәр телевизорҙы бик һирәк кенә ҡарарға тейеш, уныһында ла ата-әсәнең ваҡыты бик тығыҙ һәм баланы нисек тә әүрәтергә кәрәк булғанда. Мәҫәлән, ҡайһы ваҡытта бала уйынсыҡтарынан ялҡып китә, мыжып, нимәлер таптыра башлай, йә бер аҙ сирләп тора, тынысландырырға кәрәк. Шундай осраҡтарҙа уға фәһемле генә йәнһүрәт ҡаратып алырға мөмкиндер. Мәҫәлән, дуҫлыҡ һәм татыулыҡ, яҡшылыҡтың, дөрөҫлөктөң һәр саҡ өҫтөн ҡалыуы тураһындағы, әйләнә-тирәләгеләргә хөрмәт тәрбиәләүсе йәнһүрәттәр күрһәтергә ярай. Был йәһәттән совет йәнһүрәттәре бик отошло, уларҙа изгелек һәм яуызлыҡ, эшһөйәрлек һәм ялҡаулыҡ, тар күңеллелек һәм йомартлыҡ кеүек төшөнсәләр сағыу ярылып ята. Шулай уҡ йәнлектәр тураһындағы йәнһүрәттәр ҙә шул тиклем матур, сағыу эшләнгән, бала бәләкәй сағынан уларҙы танып, айырырға өйрәнә. Югиһә, хәҙерге ҡайһы фильмдарҙағы йәнлектәрҙе балаға нисек аңлатырға ла белеп булмай: этме ул, буреме, әллә бөтөнләй башҡа йән эйәһеме...

Бәлки, ҡайһы бер ата-әсәләр минең менән риза булмаҫ, шулай ҙа мин агрессия, тупаҫлыҡ, ҡатылыҡ һүрәтләнгән, төп герой әйләнә-тирәләгеләргә физик һәм әхлаҡи зыян килтергән, персонаждар бер-берһен үлтерешкән кадрҙар булған бөгөнгө заман йәнһүрәттәрен балаға бөтөнләй күрһәтергә ярамайҙыр, тип һанайым. Бындай фильмдарҙан һуң баланың психикаһы боҙолоуы, күңелендә йәлләү тойғоһо юғалыуы, ҡаты бәғерлеккә өйрәнеүе күренеп тора бит!

Әйткәндәй, хәҙер интернет селтәрендә балалар өсөн тәғәйенләнгән махсус үҫтереүсе программалар бихисап. Мәҫәлән, күңелле йәнһүрәт формаһында һанарға, уҡырға, төҫтәрҙе айырырға өйрәнеү, предметтарҙы исемдәре менән атау, шулай уҡ сит телдәрҙе өйрәнеү өсөн бик ҡыҙыҡлы йәнһүрәттәр бар. Миненсә, Машаны ҡарап "эш боҙорға" өйрәнгәнсе, ошоларҙы ҡарау сабыйҙарға күпкә фәһемлерәк булыр ине. (ошо урында, эх, үҙебеҙҙең "Урал батыр", "Ҡамыр батыр", "Аҡъял батыр" кеүек халыҡ әкиәттәренә төшөрөлгән башҡорт йәнһүрәттәре булһа ине, тип уйлап ҡуйҙым).

Ә балаға экран алдында күпме ваҡыт ултырырға рөхсәт итергә? Белгестәр фекеренсә, өс йәшкә тиклемге кескәйҙәрҙе экран алдына ултыртып ҡуйыу бөтөнләй ярамай, сөнки был осорҙа уларҙың хәрәкәт итеү функциялары үҫешмәгән була. Йәғни, ул әлегә бер юлы әйбер тота, хәрәкәт итә, ҡарай һәм тыңлай белмәй. Шуға күрә телевизор ҡабыҙған осраҡта улар тулыһынса бирелеп, эргә-тирәләге шаушыуҙы ла ишетмәй, бер ниндәй хәрәкәтһеҙ ҡарап тик ултыраса́ҡ. Артабан бындай балаларҙың хәрәкәт итеү, телмәр, күҙ һәм артыҡ ауырлыҡ проблемалары булыуы мөмкин. Ә инде өс йәштән уҙған балаларға йәнһүрәттәрҙе һайлап һәм ваҡытты сикләп кенә күрһәтергә кәрәк. Совет заманында бөтөн йәнһүрәттәр ҙә ҡаты контроль үтеп, һәр бер кадрҙың балаға нисек тәьҫир итеүе өйрәнелгәндән һуң ғына зәңгәр экрандарға сыҡҡан. Быны ҡайҙа ул дөрөҫлөк һәм үҫеп килгән быуынды хәстәрләү!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Ниндәй генә йәнһүрәт булмаһын, хатта беҙ фәһемле тип һанағандары ла бала өсөн өлкәндәр менән аралашыуҙы алмаштыра алмаясаҡ икәнен һәр ата-әсә тәрән аңларға тейеш. Сабыйҙар ата-әсә һөйөүен, наҙын, иғтибарын, уларҙың һәр саҡ янында булыуын тойғанда ғына аҙымдарын ышаныслы баҫыр, күңелендә изгелек, мәрхәмәтлек, сафлыҡ орлоҡтары яралыр. Әгәр ҙә тейешенсә ваҡыт бүлмәһегеҙ, баланың ерле-юҡҡа ҡысҡырып көлә, бүтәндәрҙе семтей, тешләй һәм йәмһеҙ шаярта башлауына аптырамағыҙ. Ул бит үҙенең яратҡан йәнһүрәт геройына оҡшарға тырыша!**

**Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ӘСЕҮ ТАШТЫ БЕЛӘМ...

**Мин "Киске Өфө" гәзитен күп йылдар алдырам. Уға башлап яҙылыуым да ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡты. Китапханала ултырғанда "Киске Өфө" гәзитенә күҙ һалдым. Уҡыған һайын үҙенә тартып торған был гәзиттең бар биттәрен дә уҡып сыҡтым. Ошоға тиклем унда Өфөнөң киске яңылыҡтары ғына баҫылалыр тип уйлай инем.**

Был баҫманы алдыра башлауыма ла күп ваҡыт үтеп китте. Таныштарыма ла уның тураһында һөйләп йөрөйөм, уларҙы ла яҙҙыртам. Ысынлап та, гәзит еңел-елпе мәҡәләләрҙән азат. Рубрикалары ла төрлө - хикәйәләр, шиғырҙар, диалогтар, халҡыбыҙҙың йолалары, халыҡ дауаһы ла бик оҡшай. Был баҫманы алдырыуыма шатмын, һәр һанын көтөп алам.

Әйткәндәй, гәзиттең былтырғы 39-сы һанында Илгиз Ишбулатовтың "Кошсоҡ, исемең нисек?" тигән мәҡәләһендә әсе таш, әсеү таш тураһында һүҙ булғайны. Мин хәҙер хаҡлы ялдамын, бәләкәй саҡта ауыҙ, тел иҙелеп, бер нәмә ашай алмай ауырып йөрөгәндә әсәй беҙгә быны ошо әсеү ташты ҡаптыра ине. Ысынлап та, үҙе бәләкәй генә таш рәүешендә, үҙе ялтырай, ваҡ ҡына бөрсөктәрҙән тора. Әсәй уны ҡайҙан алғандыр инде. Йылдар үткәс, ирем ветеринар булып эшләгәндә аптекаларында ошо әсеү таш булды, тик ул кристалл хәлендә түгел, онтаҡ ине. Күптәр уның тураһында белмәй ҙә, ә миндә ул һәр ваҡыт була. Кемгәлер кәрәк булһа, үҙем үк илтеп бирәм йә кәңәш итәм. Әсеү таш онтағы менән ауыҙҙы сайҡатһаң, ауырыу шунда уҡ бөтә. Ә русса атамаһы -"квасцы".

**Роза РЫҪМӨХӘМӘТОВА.**
**Баймаҡ районы Төркмән ауылы.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**2014 йылдың 23 мартында Башҡорт АССР-ы төҙөлөүгә 95 йыл тула. Билдәле булыуынса, 1919 йылдың 20 мартында Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте килешеү төҙөй. Килешеү буйынса "Бәләкәй Башҡортостан" сиктәрендә Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы (АБСР) барлыҡҡа килә (1922 йылда территориаль үҙгәрештәрҙән һуң атама Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы (БАССР) тип үҙгәртелә). Был килешеү матбуғатта 1919 йылдың 23 мартында баҫылып сыға. Ошо көн рәсми рәүештә Башҡорт АССР-ының тыуған көнө тип һанала. Тарих фәндәре кандидаты Рәсих Батыр улы ЗӘЙТҮНОВ тарихтың ошо ҡатмарлы осоро менән таныштыра.**

# БАШҠОРТОСТАН АВТОНОМИЯҺЫ -

## башҡа милләттәргә үҙбилдәләнеш өлгөһө була



### Автономия барлыҡҡа килеүҙең тәүшарттары

1917-1921 йылдар тарих фәне өсөн дә, киләһе быуындар өсөн дә бик фәһемле ваҡиғалар сығанағы булып тора. Башҡорт автономияһының барлыҡҡа килеүе илдә буталсыҡ барған осорға тура килә. Рәсәйҙә империя ҡолатыла, буржуаз власть та дәүләт менән идара итеүгә һәләтһеҙ була. Октябрь революцияһы менән башланып киткән Граждандар һуғышы башҡорт зыялыларын, идарасыларын милли үҙбилдәләнеш идеяһын ҡыйыуыраҡ күтәреүгә этәрә.

Автономияны төҙөүгә килтергән сәбәптәр революция, Граждандар һуғышы менән генә сикләнеп ҡалмай, уларҙың тамыры тарих төпкөлөнә барып тоташа. Башҡорттар Рәсәй составында йәшәү осоронда үҙ ерен, йәшәү рәүешен һаҡлап ҡалыу өсөн көрәште бер ваҡытта ла туҡтатмай. XIX быуаттағы ихтилалдар шаңдауы тынғас, Башҡортостан биләмәләрендә башҡорттарҙың ерҙәрен һатып, тартып алыу буйынса "алтын бизгәк" процесы башлана. Әйтергә кәрәк, XVIII быуат ихтилалдарының сәбәбе булып, аҫаба хоҡуҡтар өсөн көрәш тора. Сөнки заводтар төҙөү мал тотоу һәм сәсеү өсөн тәғәйенләнгән майҙандары алыу һәм үҙләштереү тигәнде аңлата. Ә XIX быуатта иҡтисадта яңы тенденция майҙанға сыға. Баҙар иҡтисады шарттарында, үҙәк Рәсәйҙең сәнәғәт төбәктәренән иҡтисади йәһәттән көслө крәҫтиәндәр дәүләттен ситенә күсенә башлай. Ил хөкүмәте был процесҡа ярҙам итә. Аграр иҡтисадтың традицион формалары һаҡланып ҡалған Башҡортостанға, хужалыҡтың яңы капиталистик элементтарға ҡаршы тороу ҡыйын була. Ике аграр цивилизация бәрелешә. Был милләт-ара ыҙғыштарға килтерә. XIX быуат аҙағында, бигерәк тә XX быуат башында башҡорт зыялылары, Дәүләт Думаһындағы мосолман депутаттары халҡыбыҙ мәнфәғәттәрен күтәреп, ҡыйыу ғына сығыштар яһай. 1905-1907 йылғы революция ла үҙ йоғонтоһон яһамай ҡалмай. Илдә башланған тетрәнеүҙәр күп милләттәрҙе, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла уята. Башында Вәлиди, Йәғәфәров, Алкин, Мортазин кеүек кешеләрҙән торған 1917-1919 йылдарҙағы милли хәрәкәттең үҙәгендә лә халыҡ мәнфәғәттәре өсөн көрәш, ер һәм башҡа мәсьәләләр тора.

Төрлө тарихи осорҙарҙа Рәсәй дәүләте төрлө үҙгәрештәр кисерә. Рәсәй дәүләтендә урта быуаттарҙан алып XX быуат башына тиклем үҙәкләштереү процесы бара, дәүләт әүҙем рәүештә "ерҙәр йыя". Урал, Себер, Урта Азия, Аляска, башҡа ерҙәр Рәсәй составына ҡушыла. XX быуат башындағы сәйәси һәм иҡтисади үҙгәрештәр дәүләттә икенсе төрлө кәйефтәр барлыҡҡа килтерә. Рәсәй халыҡтарының милли үҙаңы күтәрелә, дәүләттең үҙ үҙгәрештәр алдында тороуы тәҫмөрләнә башлай. Сираттағы тетрәнеүҙәр ваҡытында Рәсәй составында беренсе килешеү нигеҙендә төҙөлгән Башҡорт АССР-ы барлыҡҡа килә. Дәүләт системаһы үҙгәрештәр кисергән осорҙа барлыҡҡа килгән автономиялы республика - ул ысынлап та уникаль күренеш була. Башҡорт АССР-ы РСФСР составында төҙөлгән беренсе милли-территориаль берәмек булараҡ, башҡа милләттәргә үҙбилдәләнеш өлгөһө күрһәтә. Шуға күрә лә республиканы башҡа төбәктәрҙә "Төньяҡ йондоҙ" тип тә йөрөтәләр.

### "Бәләкәй Башҡортостан" һәм Граждандар һуғышы

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙә милли-территориаль автономия ҡороу өсөн милли хәрәкәт башлана. 1917 йылдың июль-август айҙарында Ырымбурҙа I һәм II Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы уҙа; был йыйындарҙа башҡорттар федератив Рәсәй составында "милли-территориаль демократик республика" төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә. I Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы Башҡорт Үҙәк Шураһын һайлай (II Ҡоролтай уны ҡабат һайлай). Үҙәк Шура Ырымбурҙа йыйыла һәм 1918-се йылдың ғинуарында үтәсәк Рәсәйҙең Ойоштороу йыйылыны (Учредительное собрание) әҙерләнә башлай. Әммә пландарҙы Октябрь революцияһы боҙа. 1917 йылдың 16 ноябрендә Башҡорт Үҙәк Шураһы Ырымбур, Пермь, Һамар, Өфө губернаһының өлөштәрен Рәсәй республикаһының автономлы өлөшө - Башҡортостан территориаль-милли автономияһы тип иғлан итә. Был ҡарар 1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа үткән III Бөтөн Башҡорт ҡоролтайында раҫлана. "Бәләкәй Башҡортостан" төшөнсәһе 1918 йылдың ғинуарында индерелә - был ваҡытта "Бәләкәй Башҡортостан автономияһы тураһында ҡанундар" тигән проект әҙерләнә.

1917 йылдағы Октябрь революцияһынан һуң башланып киткән Граждандар һуғышы Рәсәй тарихында ағай ҡустыһына ҡаршы сыҡҡан берҙән-бер ҡурҡыныс ҙур һуғыш була. Империализмды яҡлаусылар менән большевиктар, йәғни аҡтар менән ҡыҙылдар араһындағы һуғыш күп ҡорбандарға килтерә. Граждандар һуғышы башында башҡорттар аҡтар яғында көрәш алып бара. 1919 йылдың башына ҡәҙәр улар, Яйыҡ казактары менән бергә, Үҙәк Рәсәйҙә көс алған большевик идеологияһының Уралда таралыуына юл ҡуймай тора. Ләкин аҡтар етәкселегенең дәүләттең киләсәген милли территориаль берәмектәрһеҙ күреүен, башҡорттарға үҙ дәүләтселеген төҙөү хоҡуғы бирелмәйәсәген аңлау, большевиктар власының көсәйә башлауы башҡорт милли хәрәкәте етәкселеген килеп тыуған сәйәси көрсөктән сығыу юлдарын эҙләргә мәжбүр итә.

Колчак милли хөкүмәттәрҙе, автономияларҙы танымаясағы хаҡында әйтеп, ҙур стратегик хата эшләй. Шул арҡала күп фекерҙәштәрен юғалта. Һуңынан ул үҙ хатаһын аңлай, сәйәсәтен үҙгәртеп тә ҡарай. Башҡорттарҙың Мөхәммәт-Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев етәкселегендәге бер өлөшөн үҙ яғына ауҙара ла хатта. Ләкин күпселек уны танымай. Шул ваҡыт башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың милли мәнфәғәттәренә ҡолаҡ һалһа, бәлки, Рәсәй ике өлөшкә бүленгән дә булыр ине.

1919 йылда Уралда сәйәси хәл ҡатмарлы һәм билдәһеҙ көйө ҡала килә. Башҡортостан фронт һыҙығында тороп ҡала, бында хәрби хәрәкәттәр киң ҡолас ала һәм ул дошманлашыусы ике яҡтың кеше һәм матди ресурстарҙы һурыусы төбәгенә әйләнә. Ошо шарттарҙа башҡорт милли хәрәкәтенең төп бурысы - хәрби көс һәм идараны һаҡлап ҡалыу була.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ яҙып алды. (Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түштәрендәге биҙәүестәрҙе барлау алдынан муйынға таға торғандары хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп китеү кәрәк. Шуныһы ҡыҙыҡлы: муйынға тағылған биҙәүестәр менән нигеҙҙә көнбайыш башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ғына файҙаланған, бик һирәк кенә улар үҙәк өлөштә осраған, Уралдан көнсығышҡа табан улар бөтөнләй осрамай. Шул уҡ ваҡытта, бындай биҙәүестәр бик аҙ булған. Уларға, тәү сиратта, төймә, мәрйен төймә, гәрәбә төймә ингән. Дөйөм алғанда, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, ҡыҙҙар булһынмы, ҡатындармы, төймәне бик һирәк таҡҡан. Йышыраҡ улар муйындарына алғы яҡтан сылбырлы ҡаптырма (үҙәк һәм таулы райондар, уларҙа ул яғалыҡ атамаһы аҫтында ла йөрөй) менән әләктереп ҡуйылған суҡлы муйынса йәки ҡаптырма (төньяҡ-көнбайыш) таҡҡан.

Муйынға тағылған биҙәүестәрҙән күкрәк биҙәүестәренә күсеүсе булып һырға йәки муйынса (муйынтәңкәһе), теркәмә йәки теркәмә һырға тора. Теркәмә һырға үҙ-ара семәрләнеп эшләнгән металл ҡаштар менән тоташтырылған айырым ҙур көмөш тәңкәләрҙән тора. Ул йыуан тимерсыбыҡты дуға рәүешендә бөгөп эшләнә һәм муйынға кейҙерелеп, икенсе осондағы элмәккә әләктереп ҡуйыла. Был биҙәүес Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә генә осрай. Ә инде үҙәк өлөшөндә осраған теркәмә ярым ай формаһындағы тар туҡыманан тора. Ул тышҡы яғынан уҡалана, унан саҡ ҡына аҫтараҡ туҡымаға ике-өс рәт ваҡ көмөш тәңкәләр тегелә. Был осраҡта инде теркәмә бер ни тиклем ҙурая һәм квадрат йәки оҙонса тура дүртмөйөш формаһын ала. Был биҙәүестең башҡасараҡ төрө лә була: кәрәк формаһындағы туҡыма киҫәгендә ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең иҙеүе ҡаймаланған кеүек ике-өс рәт дуға рәүешендәге таҫма йәки туҡыма тегелә. Был төслө таҫмаларға эре һәм бәләкәй көмөш тәңкәләр тағыла. Бик йыш бындай теркәмә уҡа менән ҡайыла һәм бик йыш уҡа (уҡа иҙеү) йәки түшелдерек тип атап йөрөтөлә. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарында был биҙәүес утырма үнәр атамаһын ала. Уны байбисәләр бәрхәтте уҡалап йәки эре көмөш тәңкәләр менән биҙәткән.

Был күкрәк биҙәүестәре башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында берәмләп осраған һәм уларға ниндәй кимәлдә хас булыуы билдәле түгел. Һис һүҙһеҙ, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының икенсе күкрәк биҙәүестәре - мәрйендәрҙән һәм тәңкәләрҙән торған һаҡал, селтәр һәм яға үҙенсәлеклерәк.



Һаҡал (һүрәт) башҡа төр күкрәксәләрҙән һәр саҡ кәрәк формаһында булыуы һәм билгә тиклем һәм унан да түбәнерәк төшөп, тотош күкрәкте ҡаплап тороуы менән айырылған. Ул ике ҡатлы туҡыманан, уны ситләтеп мәрйендәрҙән, ә инде уртаһына боронғо көмөш тиндәр йәки ваҡ көмөш тәңкәләр ҡуйып тегелгән. Һаҡал түңәрәк шарға оҡшаш аҡыҡ төймәләр һ.б. менән ситләтелгән. Башҡа күкрәксәләр кеүек үк, ул муйынға бәйләп йәки әләктереп ҡуйылған.

*✓ Шәкәр ауырыуы шуныһы менән хәүефле - ул бер ниндәй симптомһыҙ башлана, йәғни күҙгә салынып торған клиникаһы юҡ. Шул сәбәпле диагностика саҡ ҡына һуңлауы ла мөмкин.*



**Бөгөн медицина өлкәһе ҡытлыҡ кисергән белгестәрҙең береһе, моғайын, эндокринологтарҙыр. Сөнки һәр дауалау учреждениеһы быңдай белгестәр менән комплектланған тип әйтеп булмай. Шул уҡ ваҡытта эндокринологияға бәйле проблемаларҙы асыҡлағанда ҡарауыл ҡысҡырырға ғына ҡала. Быны сәбәптәрен аңларға тырышыу маҡсатында 2-се Республика клиник дауаханаһының эндокринология кабинеты мөдире, медицина фәндәре кандидаты, юғары категориялы табип Гөлзифа Әбделхәй ҡыҙы ӘБҮШАҺМАНОВАға мөрәжәғәт иттек.**

# ҮЛЕМ КҮРҺӘТКЕСЕ шәкәр сире лә

## Тарих биттәрен байҡап…

XIX быуаттың һуңында Рәсәйҙең таулы төбәктәрендә (Урал, Алтай, Альп һ.б.), йод етешмәгәнлектән, боғаҡ сире (зоб) киң таралыуы асыҡлана һәм уҙған быуаттың 30-сы йылдарында тотош ил буйынса йод профилактикаһы уҙғарыла. Был эш бик ваҡытлы һәм уңышлы атҡарыла. Сөнки йод етешмәүе арҡаһында халыҡ араһында кретинизм (тыумыштан ҡалҡан биҙе етерлек дәрәжәлә эшләмәүҙән физик һәм психик үҫештең артта ҡалыуы) ныҡ тарала башлаған була. Мәҫәлән, ул ваҡытта Башҡортостанда кретенизм 7-9 процент тәшкил итә. Уртаса күрһәткес 3 процент булырға тейеш, тип иҫәпләнгәндә, 5 процент кретинизм киҫкен хәл булараҡ ҡарала һәм был осраҡта инде ҡарауыл ҡысҡырырға кәрәк. Ә совет власы ойошторолған йылдарҙа тап башҡорттар йәшәгән таулы райондарҙа боғаҡ сире ныҡ таралған була.

Йод профилактикаһы үткәреү һәм уның 30 йыл дауам итеүе һөҙөмтәһендә кретинизм күрһәткесе 1-3 процентҡа тиклем кәмей. Башҡортостан буйынса, һуңынан тотош СССР-ҙа, боғаҡ сире эндемияһы бөтөрөлдө тигән һығымтаға киленә һәм профилактика эше туҡтатыла. Һуңынан инде үҙгәртеп ҡороуҙар осоро башланғас, был сир бөтөнләй онотола. Мин уҙған быуаттың 90-сы йылдарында эшләй башланым. Әгәр берәй пациентта гипотиреоз (организмға гормондарҙың аҙ бүленеп сығыуы) асыҡланһа, бөтөн поликлиника табиптары ул ауырыуҙы күрергә килә торғайны. Уны конференцияларҙа ҡатнашыусыларға, студенттарға, табиптарға күрһәтәләр ине, йәғни ул һирәк осрай торған сир иҫәпләнә ине. Әммә бөгөн дә төбәгебеҙ йодҡа ҡытлыҡ кисерә һәм шуға күрә боғаҡ сире менән ауырыусылар күбәйә. Әгәр артабан да шулай дауам итһә, илдә һәр икенсе кеше боғаҡ сире менән яфалана башлаясаҡ.

## Гипотиреоз һәм уның эҙемтәләре

Бөгөн врачтарға гипотиреоз менән көн һайын тиҫтәләгән кеше мөрәжәғәт итә. Ҡалҡан биҙенең функциялары әкренәйеүе йөрәк эшмәкәрлегенең дә әкренәйеүенә, брадокардияға килтерә. Ҡан тамырҙары - ҡанды, бөйөрҙәр шыйыҡлыҡты аҡрын тиҙлек менән ҡыуа, организмда һыу туплана, башта аяҡтар, һуңынан йөҙ, артабан үпкә, йөрәк, иң ахыр сиктә инде эстең аҫҡы өлөшө шешенә. Быңдай сирлене йоҡоға тартып тик тора, эс ҡата. Әммә иң ҡурҡынысы - баш мейеһенең шешенеүе. Сөнки баш һөйәге эсенән шыйыҡлыҡ бер ҡайҙа ла китмәй, арҡа мейеһе каналы бик нескә һәм шыйыҡлыҡты бик аҙ күләмдә генә ҡыуып сығарырға һәләтле. Ә инде баш мейеһендә шыйыҡлыҡ тупланыуы шуның менән хәүефле: ул мейегә, һоро матдәгә баҫым яһай. Интеллект өсөн тап һоро матдә яуап бирә. Баҫым һөҙөмтәһендә улар һәләк була һәм интеллект түбәнәйә, кретинизм барлыҡҡа килә. Кешенең хәтере насарая, йәшәү дәрте һүнә, хис-тойғолар тоноҡлана, депрессия башлана. Ғәҙәттә, күп осраҡта гипотиреоз депрессия артына йәшеренә. Элегерәк, ҡан буйынса гормондарҙы асыҡлау ысулы булмағанда, был сирҙе диагностикалау бик ауыр була торғайны, хәҙер был йәһәттән медицина бик алға китте.

Диссертациям өсөн материалды нефть эшкәртеү предприятиеларында эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡалҡан биҙен тикшереүгә арнағайным. Улар араһында асыҡланған боғаҡ сиренең 70 процентына аутоиммун тиреоидит формаһы (ҡалҡан биҙе туҡымаларының хроник ялҡынһыныу һөҙөмтәһендә зарарланыуы. Иммунитет организмды һаҡламай, киреһенсә, ҡалҡан биҙенә һөжүм итә) диагнозы ҡуйыла ине. Хәҙер, киреһенсә, был сирҙең 70 проценты - төйөр формаһында, 30 проценты - аутоиммун тереоидит. Был нимә тураһында һөйләй һуң? Элегерәк был сирҙе йод дефицитына бәйләмәйҙәр ине. Ә хәҙер, сир төйөр формаһында асыҡланғас, уның сәбәбен барыбер йод дефицитында күрәләр. Йәғни йод дефициты ла арта, боғаҡ сиренең төйөр формаһы ла күбәйә. Был бик хәүефле, сөнки төйөрҙәр яман шешкә әүерелеүе мөмкин. Теләһә ниндәй яман шеш агрессив була, әгәр ул ҡалҡан биҙендә барлыҡҡа килһә, ахыры насар тамамлана. Йәғни теләһә ниндәй яман шеште дауаларға, уны күҙәтеп торорға, дауалағандан һуң кеше күпмеләр йылдар йәшәргә мөмкин, ә ҡалҡан биҙе яман шешенең 70 һәм унан да күберәк осрағында кешене ҡотҡарып ҡалыуы мөмкин түгел.

Гипотиреоз диагнозы ҡуйылған кеше даими рәүештә, ғүмер буйы организмдағы териод гормонын тулыландырыу өсөн тироксин - гормональ таблеткалар эсергә тейеш. Хәҙер был гормондың синтетик аналогын уйлап таптылар, шуға күрә уларҙы ҡайҙан алыу проблемаһы юҡ. Уларҙың уңайлы яғы бар: миллиграммға йәки микрограммға тиклем аныҡ доза билдәләргә мөмкин.

## Шәплек тә яҡшы түгел…

Шулай уҡ ҡалҡан биҙе үҙ функцияларын артыҡ шәп, етеҙ башҡарған осраҡ та бар. Артыҡ гормондар бүленеүгә бәйле сир гипертиреоз тип атала һәм ул Башҡортостанда барлыҡ ауырыуҙар һанынан 0,01 - 0,1 процентын тәшкил итә. Гипертиреоз бик һирәк барлыҡҡа килә. Был осраҡта инде барлыҡ ағзалар саманан артыҡ эшләй. Йөрәк рецепторҙарының туранан-тура стимуляцияланыуы тахикардияға килтерә, йәғни йөрәк шәп тибә, тирләтә, матдәләр алмашыныуы көсәйә. Майҙар, углеводтар, аҡһымдар тиҙ эшкәртелә, һөҙөмтәлә кеше күп ашай, шул уҡ ваҡытта һимермәй, киреһенсә, ябыға, эсе йомшара. Былар - күҙгә ташланып торған билдәләр. Ғәҙәттә, эндокринологияла ауырлыҡтың үҙгәреүе - кәмеүе йәки артыуы - табипҡа мөрәжәғәт итергә сәбәп булып тора. Гипертиреоз булғанда ҡалҡан биҙенең эшмәкәрлеген баҫыусы препараттар тәғәйенләп, тулыһынса дауалап була. Бары тик кеше бер йыл, йыл ярым туҡтауһыҙ дауаланырға тейеш. Был ваҡытта ҡояшта ҡыҙынырға, саунаға йөрөргә һәм башҡа йылытыусы процедуралар алырға ярамай.

## "Татлы", әммә хәүефле сир

Гормон бүлеп сығарыусы ағзаларҙың иң мөһиме, әлбиттә, ашҡаҙан аҫты биҙе һәм, мәғлүм булыуынса, тап ашҡаҙан аҫты биҙе организмды инсулин менән тәьмин итә. Әгәр инсулин дефициты барлыҡҡа килһә, диабет йәки шәкәр ауырыуы башлана. Диабеттың беренсе төрө - ашҡаҙан аҫты биҙендәге бета-күҙәнәктәрҙең юҡҡа сығыуы. Үлгән күҙәнәк ҡабат терелмәй һәм кеше сирләй башлағандың беренсе көнөнән үк инсулин ҡаҙатырға тейеш була. Әгәр өс көн эсендә инсулин ҡаҙатмай икән, үләсәк, сөнки инсулинһыҙ йәшәү мөмкин түгел.

***Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы стресты үҙ аллы хәүеф төркөмөнә индерә. Йәғни ул беҙгә даими рәүештә йоғонто яһап торған, идара итеп булмаған хәүеф факторы. Шуға күрә Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы, һәр көнөгөҙ стресс икән, уға ҡарашты, мөнәсәбәтте үҙгәртегеҙ, тип кәңәш итә. Японлар иһә, әгәр етәксең алама һәм һин уны алмаштыра алмайһың икән – эшеңде алмаштыр, ти. Әгәр көндәлек тормошоғоҙҙа стресс бар икән, унан мөмкин булған юлдар менән, хатта эш урыныңды алмаштырып булһа ла, арынырға кәрәк. Сөнки көн һайын стресс кисереп, ҡаһармандарса эшләүегеҙҙең хаҡын сәләмәтлегегеҙ менән түләйһегеҙ.***

Бында диабеттың аутоиммун сир булыуын да онотторға ярамай, йәғни иммунитет сит антитәнсәләргә, вирустарға, бактерияларға ҡаршы түгел, ә организмға ҡаршы эшләй һәм ашҡаҙан аҫты биҙенең күҙәнәктәрен ашай башлай. Был процесс бик тиҙ бара һәм 2-3 ай эсендә кеше диабет сирлегә әүерелеүе мөмкин.

Диабеттың икенсе төрө - барлыҡ бета-күҙәнәктәр бар, улар эшләй, хатта саманан артыҡ эшләй. Әммә ул туҡланыуын контролдә тотмай. Углеводлы ризыкты күп ҡуллана. Организмға углеводтар ни тиклем күберәк инә, шул тиклем инсулин эшләп сығарыла. Әгәр инде быңдай туҡланыу айҙарға, йылдарға, тиҫтә йылдарға һуҙылһа, ашҡаҙан аҫты биҙендәге генетик программаға ярашлы һалынған бета-күҙәнәктәр запасы кәмей. Йәғни был ағза үҙенә сикле күләмдә һалынған инсулинды ҡулланып бөтә. Шул сәбәпле бөгөн шәкәр сире оло йәштәгеләр араһында ғына түгел, йәштәр араһында ла арта бара. Сөнки урта йәштәгеләр туҡланыуын контролдә тотмай, ә организм углеводтар күләмен үҙләштерә алмай. Шулай итеп диабет йәшәрә. Элегерәк 45 йәшлектәрҙе хәүеф сиге тип ҡарай инек, хәҙер Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы 30 йәшлектәрҙе лә хәүеф төркөмөнә индерә.

Шәкәр ауырыуы шуныһы менән хәүефле - ул бер ниндәй симптомһыҙ башлана, йәғни күҙгә салынып торған клиникаһы юҡ. Шул сәбәпле диагностика саҡ ҡына һуңлауы ла мөмкин. Әммә уны ауыҙ кибеүе, иртән йоҡонан тороу менән йәки төн уртаһында һыуһап һыу эсергә йүгереү, иртән сәй эскәс, төшкө ашҡа тиклем түҙә алмау кеүек симптомдар аша белергә һәм ваҡытты һуҙмай, шунда уҡ табипҡа күренергә кәрәк. Юҡһа, сирҙе аҙҙырырға ла мөмкин. Йыш бәҙрәфкә йөрөгәндә лә табип менән кәңәшләшеү зарур. Сөнки бәүел менән организмдан глюкоза сыға, йәғни ул һыу ярата һәм үҙе менән бергә организмдан һыуҙы күп итеп алып сыға. Шуға күрә шәкәр сире булған кешенең көнөнә 20-40 тапҡыр хәжәт үтәргә йөрөүе, ә бүленеп сыҡҡан бәүел күләме 3-10 литрға тиклем барып етеүе мөмкин. Һөҙөмтәлә организм һыуһыҙлана, тире ҡорой, тән ҡысыта. Һыу етешмәгәнлектән, күҙ яҫмығы тоноҡланып, күреү һәләте насарая, катаракта башлана. Йәки күҙ төбөндә селтәрле шекәрә шартлауы ихтимал. Шулай уҡ ҡул һәм аяҡ ойой, сәнсә башлай, сөнки нервылар үлә, глюкотоксик эффект башлана. Әгәр бәләкәй бала ла тиктомалдан һыуҙы күп эсә, тиктомалдан ябыға икән, тиҙ арала табипҡа алып барырға һәм ҡандағы шәкәр күләмен тикшертергә кәрәк.

Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы шәкәр сире менән ауырыу хәүефенең 15 факторын билдәләй. Шуларҙың иң тәүгеһе - 45 йәштән олораҡ булыу. Ғаиләлә шәкәр сире менән ауырыусылар (ата-әсәләр, олатай-өләсәйҙәр, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр, ағай-апай-

***✓ Көн һайын стресс кисереп, ҡаһармандарса эшләүегеҙҙең хаҡын сәләмәтлегегеҙ менән түләйһегеҙ. Көндәлек стрестың сәләмәтлеккә килтергән зыян күләмен фән әлегә баһалай алмай.***

# АРТЫУҒА...

## булышлыҡ итә

ҙар) бар икән, хәүеф тағы ла арта. Шулай уҡ тыуғанда дүрт килонан - халыҡ-ара стандарттан юғарыраҡ ауырлыҡ - артығыраҡ булып тыуған балалар һәм уларҙы тапҡан әсәләр, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыусылар, гипертония, йөрәктең ишемик ауырыуы, гастероэнтерологик сирҙәр, ашҡаҙан аҫты биҙе, панкреатит менән ауырыусылар барыһы ла хәүеф төркөмөнә инә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы стресты үҙ аллы хәүеф төркөмөнә индерә. Йәғни ул беҙгә даими рәүештә йоғонто яһап торған, идара итеп булмаған хәүеф факторы. Шуға күрә

Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы, һәр көнөгөҙ стресс икән, уға ҡарашты, мөнәсәбәтте үҙгәртегеҙ, тип кәңәш итә. Япондар иһә, әгәр етәксең алама һәм һин уны алмаштыра алмайһың икән - эшеңде алмаштыр, ти. Әгәр көндәлек тормошоғоҙҙа стресс бар икән, унан мөмкин булған юлдар менән, хатта эш урыныңды алмаштырып булһа ла, арынырға кәрәк. Сөнки көн һайын стресс кисереп, ҡаһармандарса эшләүегеҙҙең хаҡын сәләмәтлегегеҙ менән түләйһегеҙ. Көндәлек стрестың сәләмәтлеккә килтергән зыян күләмен фән әлегә баһалай алмай. Әгәр үҙегеҙҙә ике генә фактор тапһағыҙ ҙа, шәкәр сире менән ауырыу хәүефе бар һәм тиҙ арала табипҡа мөрәжәғәт итеп, тикшереү үтеү зарур.

Әйткәндәй, сит илдә бер генә табип та психотерапевт менән кәңәшләшмәйенсә, ауырыуҙы дауалай башламай. Сөнки әгәр кешенең психологик статусы тотороҡло түгел, уны нимәлер борсой икән, табиптың тырышлығы бушҡа ғына буласаҡ, дауалау бер нисек тә тәьҫир итмәйәсәк. Шуға күрә, тәү сиратта, психологик торошто тотороҡландырырға, мөмкин булған ҡәҙәр стрестан арындырырға кәрәк. Табиптың уңышының 50 проценты - ул пациенттың инаныуына, уның оптимизмына, тынысланыуына бәйле.

Шәкәр сире барлыҡҡа килеүҙә, әйтеп үтеүемсә, саманан тыш ашау ҙа, бигерәк тә шәкәрҙе һәм картуфты күп ҡулланыу тора. Төрлө тәм-том, торттар, туңдырма бик ҡурҡыныс. Хәҙер кешенең саҡ ҡына аҡсаһы булһа, ул магазинға йүгерә һәм сәтләүек, ярмалар, шыттырылған һоло һ.б. алыу урынына еңел үҙләштерелеүсе углеводтарға бай продукттар ала. Организм 98 процент энергияһын углеводтар иҫәбенә бүлеп сығара, ә 1-2 процент аҡһым һәм майҙар өлөшөнә ҡала. Йәғни ул уларҙы бөтөнләй эшкәртә белмәй. Әммә углеводтар углеводтарҙан айырыла. Организмға уларҙы ҡайҙан - ҡара икмәктәнме, ағынанмы, торттанмы йәки бутҡананмы - алыуы мөһим түгел. Бутҡа, ҡаты сортлы ярмаларҙан, ярҙырылған ондан бешерелгән икмәктәге углеводтарҙы организм оҙағыраҡ үҙләштерә, углеводтар мейегә барып етһен өсөн 15 минут ваҡыт кәрәк, ә инде тәм-томдан ул шунда уҡ, ашағандан һуң 4 секунд үткәс, мейегә барып етә. Организм ошоға өйрәнә һәм тиҙ барлыҡҡа килгән энергияны талап итә башлай. Был бигерәк тә аҡыл талап ителгән эшмәкәрлектә (студенттар имтиханға әҙерләнгәндә, отчеттар ваҡытында, интеллектуаль эшмәкәрлек менән шөғөлләнгәндә) сағылыш таба. Ләкин ошо ваҡыт үтеү менән тиҙ үҙләштерелеүсе углеводтарҙы ҡулланыуҙы туҡтатып, сәләмәт ризыҡҡа күсергә кәрәк.

### Ялҡаулыҡ ғәйепле…

20 йыл эшләү дәүеремдә шәкәр сиренән ҡотолоуҙың бер нисә генә осрағын күҙәттем. Ул да булһа, диагностика ваҡытындағы яңылышлыҡҡа бәйле. Йәғни кеше киҙеү менән ауырыһа, инсульт, инфаркт үткәрһә, операция эшләтһә - ҡанда шәкәр күтәрелә. Был осраҡта табиптар диагноз ҡуйырға ашыҡмай. Ә инде өс ай тикшерелеп йөрөп, ауырыуының киҫкен ваҡытын үткәреп ебәргәндән һуң ғына ҡандағы шәкәр кимәле юғары булһа, артабан диабетҡа диагностика үткәрәбеҙ. Ҡайһы бер ауырыуҙар йылдар буйы күҙәтеү аҫтында тора, шул уҡ ваҡытта татлы ризыҡтар ҙа ашай, әммә ҡандағы шәкәр кимәле нормала ҡала. Өҫтәмә рәүештә тикшереүҙәр үткәргәндә инде, ул кешегә диагноздың яңылыш ҡуйылғаны асыҡлана. Йәғни эндокринолог кешенең алда атап киткән ауырыуҙар үткәреүен иҫәпкә алмайынса диагноз ҡуйһа, был диагноз ғүмерлеккә ҡала, сөнки бер табип ҡуйған диагнозды икенсе табип бер ваҡытта ла икенсе төрлө итеп раҫламаясаҡ.

Шулай уҡ шәкәр кимәле һимереү һәм артыҡ ашау фонында күтәрелеүе мөмкин. Әгәр кеше аҡылға ултырып, сәләмәтлеге өсөн яуаплылыҡты үҙ ҡулына алып, йәшәү, ашау рәүешен ҡәтғи контролдә тота икән, диабет кире ҡайтмай. Ләкин бының өсөн углеводһыҙ, майһыҙ диета һаҡларға, ауырлығыңды контролдә торға, даими рәүештә физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк. Әммә бындай режим менән йәшәүселәр бөтөнләй юҡ тиерлек. Ни өсөн? Сөнки кешеләрҙең ялҡаулығы көслөрәк. Миңә бер пациент шулай тигәйне: "Диабет менән сирләүселәр - иң ялҡау кешеләр". Ысынлап та, кеше бит эш күплеккә, вазифаһына, балалары, ғаиләһенә һәм башҡа сәбәптәргә һылтанып, аҡланырға ярата, ләкин үҙенең сәләмәтлеген хәстәрләмәй. Ә бит хатта психологтар ҙа, кеше, тәү сиратта, үҙен яратырға тейеш, тип билдәләй. Кемдер, мин эшемде яратам, эшем өсөн шуны-шуны үтәргә лә әҙермен, ти икән, ул алдаша. Үҙен яратмаусы, үҙенә яҡшы мөнәсәбәттә булмаусы бер ваҡытта ла үҙен урап алған башҡа нәмәләргә яҡшы мөнәсәбәттә була алмай. Үҙен яратҡан кеше генә һәр саҡ үҙе өҫтөндә эшләйәсәк, камиллыҡҡа ынтыласаҡ, табиптарҙың ҡушҡанын үтәйәсәк. Табип талаптарының иң ябайы: йылына бер тапҡыр ҡалҡан биҙенә ультратауыш тикшереүе үтергә, өс ай һайын ҡандағы шәкәр кимәлен тикшертеп торорға, йылына бер тапҡыр гормондарға анализ тапшырырға кәрәк.

### Өйөндәге хәлде күршеңдән һора

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында бер коллегам Германияла халыҡ-ара конференцияла ҡатнашҡайны. Уның: "Германияла диабет диагнозы беренсе тапҡыр асыҡланған пациентҡа табип-эндокринолог, эндокринология шәфҡәт туташы, диетолог, физик культура табибы өс көн буйына көн режимын төҙөй, физик күнегеүҙәр билдәләй, ауырыуҙың һорауҙарына яуап бирә, шәфҡәт туташы нисек укол яһарға, дарыуҙарҙы нисек эсергә өйрәтә",- тип һөйләгәнен әкиәт кеүек итеп тыңлағайныҡ. Өҫтәүенә, бындай курстар даими рәүештә ҡабатланып тора икән. Шулай уҡ телевидение, радионан сәләмәтлек тураһында тапшырыуҙар даими була, һәр ерҙә плакаттар эленгән. Шәкәр сирлеләр "Диабет мәктәбе"ндә уҡый. Әгәр диабет мәктәбен үтмәһәң, страховка түләнмәй, имеш, ә уларҙа һәр ерҙә страховка кәрәк. Беҙҙә иһә ауырыуҙы беренсе тапҡыр ҡабул итеүгә 15 минут ваҡыт бирелә, ҡабаттан ҡабул итеүгә - 12 минут. Ошо ваҡыт эсендә нимә аңлатып өлгөрәһең инде. Икенсе яҡтан, тағы бер тапҡыр ҡабатлау булһа ла, әйтмәй сара юҡ: ауырыуҙар бөтөн яуаплылыҡты табиптар елкәһенә генә һалып ҡуйырға тырыша. 20 йыл эшләү дәүеремдә күҙәтеүемсә, ауырыу стаждары минең эш стажым менән бер булған кешеләр бар. Улар ошо ваҡыт эсендә үҙҙәренең сире тураһында, исмаһам, берәй китап йәки брошюра уҡыһа икән. Беҙҙә профилактика эше лә аҡһай. Белем бирелмәй, табиптар етешмәй, уларға эләгеүе ауыр, дарыуҙар менән тәьмин итеүҙә өҙөклөктәр бар. Шуға күрә, исмаһам, үҙ аллы китаптар уҡып, һорауҙары тыуһа, табипҡа килгәндә яҙып алып килһендәр ине. Әйткәндәй, шәкәр сирлеләрҙең һаны йылдан-йыл артыуға, баш ҡаланың 46-сы поликлиникаһында бушлай "Диабет мәктәбе" эшләүгә ҡарамаҫтан, уға йөрөүсе юҡ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайһы ғына табипты тыңлама, уларҙың һәр ҡайһыһы медицинаның профилактика йүнәлешендә булырға тейешлегенә айырыуса баҫым яһай. Ысынлап та, ауырыуҙы дауалағанға ҡарағанда уны иҫкәртеү яҡшыраҡ икәнен хәҙер инде доға урынына ҡабатлайбыҙ. Әммә шул уҡ ваҡытта, ауырып үлеүселәр араһында тәүге урындарға йөрәк-ҡан тамырҙары, яман шеш һ.б. ауырыуҙар ҡуйылғанда, уларҙың сәбәптәренең береһе булып эндокринология сирҙәре тороуын да онотмаһаҡ ине. Хәйер, был инде табиптар, ауырыуҙар кимәлендә хәл ителеүҙән бигерәк, республика етәкселегенең күҙ уңында торорға тейешле мәсьәләлер, моғайын. Сөнки, уйлап ҡараһаң, республикала айырым кардиология, онкология диспансерҙары бар. Ә эндокринология буйынса, баш ҡалала ғына көн һайын тиҫтәләгән кешене кисекмәҫтән дауалауға һалыу талап итеһә лә, дауаханаларҙағы бүлексәләрҙән башҡа бер ниндәй учреждение юҡ. Һүҙ милләт сәләмәтлеге хаҡында барғанда, үлем күрһәткестәрен арттырған сирҙәрҙең тәүсәбәбе, сығанағы булып торған сирҙәрҙе профилактикалауға, уларҙы булдырмауға йүнәлтелгән эшмәкәрлек киң йәйелдерелһә, насармы ни?..**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**



***Миңә бер пациент шулай тигәйне: "Диабет менән сирләүселәр - иң ялҡау кешеләр". Ысынлап та, кеше бит эш күплеккә, вазифаһына, балалары, ғаиләһенә һәм башҡа сәбәптәргә һылтанып, аҡланырға ярата, ләкин үҙенең сәләмәтлеген хәстәрләмәй. Ә бит хатта психологтар ҙа, кеше, тәү сиратта, үҙен яратырға тейеш, тип билдәләй. Кемдер, мин эшемде яратам, эшем өсөн шуны-шуны үтәргә лә әҙермен, ти икән, ул алдаша. Үҙен яратмаусы, үҙенә яҡшы мөнәсәбәттә булмаусы бер ваҡытта ла үҙен урап алған башҡа нәмәләргә яҡшы мөнәсәбәттә була алмай. Үҙен яратҡан кеше генә һәр саҡ үҙе өҫтөндә эшләйәсәк, камиллыҡҡа ынтыласаҡ, табиптарҙың ҡушҡанын үтәйәсәк. Табип талаптарының иң ябайы: йылына бер тапҡыр ҡалҡан биҙенә ультратауыш тикшереүе үтергә, өс ай һайын ҡандағы шәкәр кимәлен тикшертеп торорға, йылына бер тапҡыр гормондарға анализ тапшырырға кәрәк.***

***✓ Мифтахетдин дауалау серҙәренә үҙ аллы уҡып өйрәнеп, һәүәҫкәр табипҡа әйләнә. Үҙ аллы дауалай башлауын Кинйәбулатҡа ҡайтҡас, муллалыҡ эше менән бер рәттән алып бара.***



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Оҙон-оҙон юлдар үткән, ир уртаһы йәшен артылған һыбайлы, арбаға баҫыраулап тейәлгән бесән өҫтөндә ултырып килгән һаҡалтай ҡарттың да үҙе кеүек үк әүлиә икәнен һиҙенеп, уның көсөн һынап ҡарарға була. Юлдан ситкә сығып юл бирә лә, ҡарттың арбаһындағы бесәнгә кирәмәт көсө менән ут тоҡандырып, нимә булырын ҡыҙығып күҙәтә башлай. Ҡарт артына боролоп та ҡарамай, атын юрттырып барыуын белә, ә бесән йөгө өҫтөндә яҫтыҡтай ғына ҡара болот барлыҡҡа килеп, бесәндең яна башлаған еренә генә ямғыр булып яуып, һүндереп китә. Шунан һуң һыбайлынан йөк өҫтөндәге ҡартҡа тиклем оҙаҡ ҡына ваҡыт йәйғор таҫмаһы һуҙылып барған тиҙәр. Был уларҙың бер-беренән сәләмләп, танышып, изге ғәмәлдәр тураһында гәпләшеп барыуҙарының бер мөғжизәһе булғандыр...**

# ӘҮЛИӘЛЕК - БӨЙӨК КӨС УЛ,

## йәғни Мифтахетдин мулла тураһында бер хәтирә



### Күҙ бәйләүсе Йәмлих

Белорет районындағы Үрге Әүжән дауаханаһында эшләгән осорҙа, шул ауылда тыуып-үҫкән бик көслө күҙ бәйләүсе (гипнотизер) тураһында хәбәрҙәр ишеткәйнем (1980-1982 йылдар). Уның ҡайҙа, кем булып эшләп йөрөгәнен дә белмәйҙәр ине. Ялға ҡайтҡан саҡтарында халыҡты клубҡа йыйып, төрлө күҙ бәйләү кирәмәттәре күрһәтә торған булған. Әммә минә, бик теләһәм дә, уның менән осрашыу мөмкинлеге тура килмәне.

Унан һуң, Ишембай районының Ҡолғона дауаханаһына күскәс тә, Яңы Һәйет ауылында һуғышҡа тиклемге осорҙа йәшәгән күҙ бәйләүсе Йәмлих исемле кеше тураһында ишетергә тура килгәйне. Күңеле килгәндә ул да ауылдаштарына төрлө мәҙәк кирәмәттәр күрһәткән. Һөйләгәндәренән минең хәтерҙә шул һаҡланған. Яҙ ваҡыты була. Йылғаға яҡын ултырғас, ҡайһы бер йылдарҙа ташҡын һыу быларҙың өйҙәренә тиклем үк яҡынлаша. Бер яҙҙы Йәмлихтең әсәһе күрше-тирә ҡатын-ҡыҙҙарын "Ҡунаҡ күрһәтеү сәйе"нә саҡыра. Ҡунаҡтары төш ваҡыты ауышҡас, йыйылышып, өйгә килеп тулалар. Кейеп килгән ҡаталарын соланда түгел, өйгә үк индереп, ишек төбөндәге иҙәнгә теҙеп ултырталар. Үҙ эше менән инеп-сығып йөрөгән Йәмлих шул ҡаталарға әләгеп абынып китә. Етмәһә, тегеләр унан көләп хихылдашалар икән. Йәмлих табын аҙағында быларҙы аҡылға ултыртырға була. Таралышырға ваҡыт еткәс, кинәт солан аша өйгә ташҡын һыу тула башлай. Ҡатындар бөтәһе лә ҡабаттан урындыҡ өҫтөнә һикерешеп менеп бөтәләр. Һыу урындыҡтың өҫтөнә үк күтәрелә. Етмәһә, һыуҙа эре-эре бәрҙе, ажау балыҡтары йөҙә икән. Һыу ни тиклем тиҙ килеп баҫһа, шулай уҡ кире кәмей, иҙән асыла. Тупһа аша йөҙөп сыға алмаған теге эре балыҡтар иҙәндә тулышып ятып ҡалалар, ти. Йәмлих быларға: "Ана, көлдөксәлә итҡан бысаҡтарҙы алып, балыҡтарҙы тотоп салығыҙ. Алып ҡайтырһығыҙ!" - ти икән (йола буйынса эре балыҡтарҙы ла салалар һәм был эш ҡатын-ҡыҙға ла рөхсәт ителә). Былар тотоналар балыҡтарҙы йыйып салырға. Өйҙәренә ҡайтҡас, ни күрәләр: йыйған балыҡтары юҡ булған, ә ҡаталарының морондары ҡырҡылып бөткән... Еңгәләрен, йәшерәк апайҙарҙы йә үгеҙҙән, йә айыуҙан, йыландан, һағыҙаҡтан, усал ата ҡаҙҙарҙан баҫтыртып шаяртырға ла яратҡан, тиҙәр уны.

Элек Әүжән мәрйәләре ҡайҙа барһалар ҙа күмәкләшеп йөрөгәндәр. Стәрлегә, Петровскийға барһалар, ҡайтыр юлдары Яңы Һәйет аша үтә. Кискә табан ҡапҡа төптәрендә йыйылышып ултырған Һәйет ирҙәренә Йәмлих, хәҙергесә әйткәндә, эротика ла күрһәткеләгән. Мәрйәләр ауыл урамына килеп инеү менән ҡапыл ғына юлды һыу баҫа башлай. Тегеләргә итәктәрен билдәренә тиклем күтәреп тотоп барыуҙан башҡа сара ҡалмай. Ошондай ҡылыҡтары өсөн Йәмлихте төрмәгә лә ултыртҡандары билдәле...

### Исмәғил ағайҙың һөйләгәне

Минән егермеләп йәшкә өлкән булыуына ҡарамай "Дусалин ағай" тип өндәшкән, ә мин дуҫтарса "Исмәғил ҡустым" тип шаяртҡан Дилмөхәмәтов Исмәғил ағай 15-16 йәштәрендә Силәбелә ФЗО-ла уҡып һәм эшләп йөрөгәндә (1944-1945 йылдар) ишеткән бер хәтирәһен һөйләне. Ул ваҡиғаны Байғужа ауылынан Тәлғәт исемле дуҫынан ишетә. Кинйәбулатта 1930 йылдарға тиклем бик көслө рухлы мулла йәшәгән. Мулла ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә күҙ бәйләүсе, күрәҙәсе, табип, йәғни дөйөмләп әйткәндә, әүлиә булған, тиҙәр. Яҡын-тирә ауылдарҙағы ололар һәр ваҡыт йәштәргә: "Мифтахетдин бабайға хаслыҡ ҡылыу түгел, уның тураһында насар уй ҙа уйлай күрмәгеҙ! Ул бөтә нәмәне лә белеп, һиҙеп тора",- тиер булған. Әҙәмдәрҙең дә төрлөһө бар бит. Күптәре ышанған, ә ҡайһы берҙәре буш һүҙ тип уйлаған. Шундайыраҡ уйлы, урлашырға әүәҫерәк дүрт егет: "Күрәҙәсе булғас, бер кәбән бесәнен Аллағыуатҡа алып барып һатҡанды белеп ҡараһын әле", - тип һөйләшәләр ҙә, Мифтахетдин мулланың Арыҫланйылға башындағы бесәнлегендә ултырған кәбәндәренең береһен урларға ниәтләйҙәр. Таң атыр-атмаҫтан бесәнлеккә барып, бер кәбәнде өс санаға тейәп, оло юлға сыға былар. Йәнәһе лә, таң атҡансы ауылдан сығып өлгөрәләр. Ләкин шул тиклем аяҙ, тыныс ҡына торған иртәлә ҡотороп буран сыға ла китә. Буран күҙ асҡыһыҙ, етмәһә, ел ҡаршыға иҫә, ти. Егеттәр йөк өҫтөндә тундарының яғаларын күтәреп, йөҙҙәрен ҡаплап, аттарҙың оло юлды ташламаҫына ышанып, дилбегәләрен ебәреп, уларҙы үҙ иркенә ҡуялар. Буран ҡалай тиҙ башланһа, шулай уҡ тиҙ генә баҫыла. Шул мәлдә быларҙың аттары ла ниңәлер туктап ҡала. Тун-толоп яғаларын төшөрөп, тирә-яҡҡа ҡарағалар, шар асыҡ ҡапҡа алдында торалар ти былар. Етмәһә, йортонан көлә-көлә Мифтахетдин мулла сығып килә. Үҙе быларға: "Инегеҙ, инегеҙ, шаҡшылар. Бында уҡ килтереп еткергәс, әүеҫлек башына ла өйөп ҡуйығыҙ инде!" - ти икән. Бесәнде килтергәндәре, өйгәндәре өсөн түләп, ашатып-эсереп ҡайтарып ебәргән быларҙы. Иң ғәжәбе шул: был егеттәр аҙаҡ бер ваҡытта ла кеше әйберенә ҡул һуҙмаған.

### Олатай менән танышыу шулай башланды

Исмәғил ағайҙың һөйләгәндәре олатайым Фәйзрахмандың атаһы Мостаҡ мулла исемендә тирә-яҡҡа даны таралған күрәҙәсе, күҙ бәйләүсе, һәүәҫкәр табип, дөйөмләп әйткәндә, әүлиә Мифтахетдин Ҡотломөхәмәт улы тураһында ине. Малай сағымда уҡ ауыл кешеләренән, олатай-өләсәйемдәрҙән, әсәйемдән Мостаҡ мулла тураһында һөйләгәндә йыш ишетһәм дә, артыҡ иғтибар бирмәгәнемә бөгөн үкендерә. Сөнки Мифтахетдин мулла ла, Зәйнулла Рәсүлев, Мөжәүир хәҙрәт һәм Уйылдан муллалар кеүек, әүлиәлек көҙрәтенә эйә булған шәхестәрҙең береһе була. Минең үкенеү уның тураһында мәғлүмәттәр туплай алмағаныма бәйле, әсәйем олатаһының өй башында ағас тәпәндәрҙә, һандыҡтарҙа һаҡланған китаптарын, ҡульяҙмаларын, бигерәк тә бөгөнгә көндә юғалған тип һаналған башҡорттарҙың "Тиб" тип аталған табиплыҡ китабын һаҡлап ҡала алмағанына үкенә торғайны. 1943-1944 йылдарҙың иң аслыҡ-ялаңғаслыҡ осоронда әсәйемә 11-12 йәш була. Атай һәм оло ағай һуғышта. 15 йәшлек Мәғҙән ағалары төрмәлә, әсәләре ҡара таңдан ҡара кискә тиклем колхоз эшендә. Өйҙә тағы ла 4 һәм 5 йәшлек ҡустылары була. Яғырға утын юҡлыҡтан, өйҙә һыуыҡ. Әсәһенең рөхсәтенән өй башындағы теге ғәрәпсә яҙылған китаптарҙы алып төшөп, төрлө уландар, кешенең тән ағзалары төшөрөлгән биттәрен ҡарай-ҡарай, йыртҡылап, мейескә яғып йылынышып ултыра улар (ул китаптар, һис шикһеҙ, медицинаға ҡағылған боронғо китаптар булған!) Әсәйем һәр ваҡыт: "Үҙем шул аслыҡтарҙан иҫән ҡалып, кейәүгә сығып, табиплыҡҡа уҡып сығыр улым булырын белһәм, бәкса артына төшөп, ҡоро-һары тал, өйәнкә сыбыҡтарын һындырғылап алып индереп яғыр йылынырҙар, ә китаптарға теймәҫ инем", - тип үкенде.

Алда әйтеп үтеүемсә, Мифтахетдин дауалау серҙәренә үҙ аллы уҡып өйрәнеп, һәүәҫкәр табипҡа әйләнә. Табиплыҡҡа ҡағылышлы төрлө китаптарҙы уҡый башлауы Һайран ауылы мәҙрәсәһендә, Рафиҡ муллала мәҙрәсә белеме алған ваҡыттарҙа була, үҙ аллы дауалай башлауын Кинйәбулатҡа ҡайтҡас, муллалыҡ эше менән бер рәттән алып бара. Үҙенең балалары үсмер йәшендә булғанда тирә-яҡҡа даны таралған табипҡа әйләнә. Бүрәнәләрен яҡындағы урмандан күтәреп ташып, үҙе бурап һалып кергән йортона өс метр самаһы ара ҡалдырып, тағы ла бер бәләкәйерәк дүртмөйөш өй күтәргән була. Уларҙың араһын да бүрәнәләрҙән бурап күтәреп, ялғап, бер ҡыйыҡҡаябып, ике йортҡа ла кереп-сығып йөрөргә уңайлы, йылы солан эшләтә. Ана шул тәкәтмә йортонда тирә-яҡтан килгән ауырыуҙарҙы ятҡырып, төрлө үлән, тамырҙарҙан һәм үҙе генә белгән башҡа әйберҙәрҙе бергә ҡушып әҙерләгән дарыуҙары менән дауалай. Шул уҡ ваҡытта өшкөрөү һәм күҙ бәйләү ысулдарын (гипноз) киң ҡуллана. Гипноз менән ауыртыу-һыҙланыуҙарҙы баҫып, йоҡоно һәм уй-фекерҙәрҙең ағышын ыңғай яҡҡа көйләп була. Ә бына өшкөрөүгә килгәндә, бөтә өшкөргән-төкөргәндең дә шыбырлауы бер үк көскә эйә түгел.

### Ябай тоҙ көсө

Ысын әүлиәләрҙең өшкөрөүе генә ыңғай тәьҫиргә эйә. Бына ошо өшкөрөү тураһында әҙерәк фәнни мәғлүмәт биреп китеү ҙә урынлы булыр. Тыумышы менән Кинйәбулаттан булып, Ҡолғона ауылына килен булып төшөп, шунда ғүмерен үткәргән Фәкиһә апай үҙенең атаһынан ишеткән бер ваҡиға тураһында һөйләгәйне. Атаһы Сынтимер малай сағында бик сибек, ябыҡ була. Күпме ашаһа ла үҙенә йоҡмай, һәр ваҡыт хәлһеҙлек тойоп, аяҡ өҫтө тигәндәй йөкомһорап йөрөй. Бик йыш эсенә йәбешеп яфалана. Мифтахетдин мулла ниндәйҙер эш менән Сынтимерҙең атаһына килгән була. Малайҙың хәлен бер ҡарауҙа аңлап, уны урындыҡҡа һалып, күпмелер ваҡыт эсенә баҫҡылап, һыйпап ултырғандан һуң: "Ух, әшәкеләр! Ҡалай күмәктәр үҙҙәре. Хәҙер мин уларҙы..." - тип һөйләнә-һөйләнә бер семтем генә тоҙҙо аҡ сепрәк өҫтөнә һалып, ҡаршыһына тубыҡланып ултырып, бик оҙаҡ ҡына уҡып, өшкөрөп ултыра. Аҙаҡ Сынтимергә тоҙҙо ҡоролай йотоп, артынан таҙа һыу эсергә ҡуша. Ярты сәғәт тә үтмәй, малайҙың эсе китә башлай һәм шул уҡ ваҡытта унан егермеләп артыҡ 10-15 сантиметрҙай эре селәүсен йыуанлығындай тере ҡорттар ҡойолоп төшә. Шунан һуң ул тәүлек самаһы үлек кешеләй йоҡлай. Аҙаҡтан ашауы һәйбәтләнеп, таҙарып, егет рәүешенә керә. Бында Мифтахетдин олатай уға бары өшкөрөп бер семтем генә тоҙ эсерә. Ә бит ул быға тиклем дә ашаған әйберҙәрен тоҙламай ашамағандыр.

Болгарияла ғүмер иткән һуҡыр әүлиә Ванга үҙенә киләсәк кешеләргә һәр ваҡыт бер семтем тоҙ, йә шаҡмаҡ шәкәр алып килергә ҡушҡан. Шуларҙы ҡулында тотоп ултырғандан һуң, килгән кеше тураһындағы мәғлүмәттәрҙе, йәғни яҙмышын маңлайына яҙылғандағыса һөйләп бирә алған. Бөтәгеҙгә лә билдәле, беҙҙең бөгөнгө кеҫә телефондарыбыҙ энә күҙәүендәй генә булған кремний кристалдарында эшләй. Әммә йөҙәр, меңәр мего, гигобайт мәғлүмәттәрҙе үҙендә һаҡлай һәм тирә-яҡҡа тарата ала. Шул уҡ ваҡытта ябай тоҙ, шәкәр һәм төрлө минералдарҙың кристалдары эргә-тирәһендәге кешеләр, ваҡиғалар тураһында мәғлүмәттәр туплай ала һәм шул уҡ ваҡытта ул кристалдарға фәҡәт ҙур рухи көскә, әүлиәлеккә эйә булған шәхестәр генә бөтә тереклектәргә, хатта тәбиғәткә тәьҫир итерҙәй күрһәтмәләр, бурыстар, ҡәтғи үтәлергә тейешле бойороҡтар индерә, яҙа алған.

Әлеге осраҡта Мифтахетдин олатай Сынтимергә эсергән бер семтем тоҙға эсәк ҡорттарына зыян килтерер, хәлһеҙләндерер һәм эсәк эшмәкәрлеген тиҙләтер кеү, йәғни бойороҡ индерә алған. Һуңғы йылдарҙа донъя ғалимдары Ер шарының теүәл йомро түгел, ә ваҡ ҡына ҡырҙары булған кристалл рәүешендә икәнлеген иҫбатланы. Шуға ла Ер шары үҙендә үткәндәр һәм киләсәк тураһындағы мәғлүмәттәр һаҡлай, бөтөн ғаләм киңлеге менән дә мәғлүмәти бәйләнештә тора.

Былар тураһында фәҡәт Бөйөк ғаләм аҡылы, йәғни Хоҙай Тәғәләбеҙ үҙе һайлап алып, әүлиәлек көсөн күндергән айырым шәхестәр генә һиҙә һәм күрәҙәлек ҡыла ала. Шулай булмаһа, яңы ғына донъяға килгән тәүге ейәне Фәтхрахманды ҡулына алғас:

- Эй, улым, Ватан һуғышына ҡаршы тыуҙың. Ғүмерең генә оҙон булһын инеләлә, - тип, күҙҙәре йәшкәҙәп әйтә алмаҫ ине (ул 1943 йылда фронтта хәбәрһеҙ юғала).

**Рәдис ДУСАЛИН,**
**Ишембай районы Маҡар ауылы участка дауаханаһы табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, һәүәҫкәр тарихсы, шағир.**
**(Дауамы бар).**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ…

# МӘҘӘНИӘТ ЙЫЛЫ...

## ауылдарыбыҙға ла барып етһен ине

2014 ЙОЛ МӘҘӘНИӘТ ЙЫЛЫ

ГОД КУЛЬТУРЫ

**2014 йылды Мәҙәниәт йылы тип иғлан итеү күңелемдә ниндәйҙер өмөт уятып та ҡуйҙы әле. Республика, милләт мәҙәниәтен һуғарыусы ауыл мәҙәниәте лә етәкселәр иғтибарына эләкмәҫме, Мәҙәниәт йылы ауыл клубтарына яңынан йән өрмәҫме икән, тим. Был һүҙҙәремде йөпләп, үҙемдең тыуған яҡтарымдағы - Салауат районындағы мәҙәниәт усаҡтары тураһында ғына яҙып үтмәксемен.**

Беҙҙең йәш сағыбыҙ совет осорона тура килде, ул ваҡытта киске уйынға "кәзә клубына" (унда кәзәләр инеп, тиҙәктәрен өйөп китә торғайны) йыйылған булыр, иң алда иҙәндәрҙе һепереп, йыйыштырып алыр инек, егеттәр туң утын менән мейес яғып ебәрер ине. Сей утын быҫҡып янғансы, таралышыр ваҡыт та етә торғайны. Беҙ хәҙерге йәштәр кеүек, төн уртаһында уйынға сыҡмай торғайныҡ, ә кистән йыйылып, төн уртаһында таралышыр инек, сөнки иртә тороп, эшкә егелергә кәрәк ине.

1994 йылда Салауат районындағы тыуған ауылым Илсекәйҙә, ун йыл буйы төҙөлгәндән һуң, ике ҡатлы мөһабәт мәҙәниәт йорто ҡалҡып сыҡты. Баштараҡ барыһы ла һәйбәт ине. Иҫтә ҡалдырып һөйләрлек саралар уҙҙы: ауылда утыҙ йыл элек булып, онотолоп бөткән "Ҡарға бутҡаһы" байрамы тергеҙелде, төрлө урамдарҙа йәшәүселәрҙең йыр-бейеү буйынса ярыштары ойошторолдо.1995 йылдың апрелендә үткәрелгән "Шәжәрә байрамы"нда ауылдағы төп биш нәҫел вәкилдәренең әүҙем ҡатнашып, был сараның оло рух тантанаһына әүерелеүен һағынып хәтерләргә генә ҡалды. Мәҙәниәт өлкәһенә булған битарафлыҡ, мәҙәниәт усаҡтарының йылыға туймауы уларҙан кешеләрҙе бөтөнләй биҙҙерҙе. Кемдең рухи аҙыҡ тәғәмләйем, тип, һыуыҡ клубта өшөп-туңып ултырып ҡайтып, ауырып ятҡыһы килһен инде! Кирбестән һәйбәт итеп төҙөлгән Илсекәй мәҙәниәт йорто ла шулай һүнде лә ҡуйҙы. Мәҙәниәт йорто менән бергә рухиәт тә һүрәнләнде һымаҡ. Былтыр ауылыбыҙҙа үткән балалар һабантуйында бер генә ҡыҙ бала башҡорт телендә шиғыр һөйләне, тинеләр. Боронғо башҡорт ауылында йәшәгән балаларҙың барыһы ла ошо милли байрамда урыҫ телендә шиғыр һөйләгән, йыр йырлаған. Күңеле кителеп ҡайтҡан оло йәштәге бер апай һөйләне миңә был хәлде. Ултырып иларлыҡ бит!

Түбәләҫ ырыуына ҡараған Ҡалмаҡҡол ауылының старшина Мөрсәлим исеме менән аталып йөрөтөлгән өлөшөндә XIX быуат аҙағында Һамар-Златоуст тимер юлы төҙөлгәс, урыҫтар нигеҙ һалған урам барлыҡҡа килеп, хәҙерге көндә ошо исем бөтөнләй нығынып, ауылдың рәсми атамаһына әүерелде. Был ауылда бөгөн Мөрсәлим ауыл биләмәһе хакимиәте, почта бүлексәһе урынлашҡан, нефтебаза, "Башкиравтодор"ға ҡараған предприятие һ.б. бар. Әммә мин белгәндән бирле өс мендән ашыу халҡы булған шундай ҙур ауылда - Мөрсәлимдә кешесә мәҙәниәт һарайы булғаны ла юҡ. "Тимер юлсылар клубы" тип йөрөтөлгән ҡыҫынҡы ғына бер кирбес йортта үтә бар саралар. Шуға ла, дискотека, тигән булып, йәш мөрсәлимдәр беҙҙең Илсекәй мәҙәниәт йортона килә. Әхлаҡи бөйөк ҡиммәттәр тейәп түгел, һыра эсеп, боларып, һүгенеп, урындағы йәштәрҙең былай ҙа йомшарған милли һыҙаттарын бөтөнләй ҡаҡшатып китеүҙән ғибәрәт был "десанттар". 60-сы йылдарҙа русса уҡытыу сәйәсәте һөҙөмтәһендә боронғо башҡорт ауылы Ҡалмаҡҡол тамам урыҫлашты, бөгөнгө көндә Мөрсәлим урта мәктәбе урыҫ мәктәбе, тип йөрөтөлә, башҡорт теле дәрестәре лә йылдан-йыл ҡыҫырыҡлана. Мөрсәлимдә генә түгел, тыуған ауылым Илсекәйҙә лә балалар үҙ атаәсәһен, мама, папа, тип үҫә.

Райондағы Урмансы ауыл мәҙәниәт йорто ла бик күптәнге, үткән быуаттың 60-сы йылдарында төҙөлгән. Унда һаман да ирле-ҡатынлы Лидиә менән Сафуан Сәйетғәлиндар хеҙмәт итә икәнен беләм. Әммә клуб иҫкергән, һыуыҡ клубта саралар ойошторһалар ҙа, уларҙың тырыш хеҙмәте тейешле кимәлдә баһаланмай, тип уйлайым. Ҙур һәм әүҙем халыҡ йәшәгән Урмансы ауылына лайыҡлы заманса мәҙәниәт йорто ла кәрәк, тим. Күршеләге Ҡарағол ауылында ла клуб бик бәләкәй, исмаһам, төкәтмә һалып булһа ла, уны ҙурайтыу сараһын эҙләргә кәрәк ине лә бит. Хәйер, клуб ҡайғыһымы ни ҡарағолдарға? Уҡыусы балалар аҙ, тигән һылтау менән гөрләп эшләп килгән аҙ комплектлы башланғыс мәктәп тә ябылып ҡуйҙы ауылда. Сүрәкәй (Нуғай) ауылында хәҙер бөтөнләй клуб юҡ шикелле, әллә бер ҙә булманымы икән? Хәҙер ауылда хатта башланғыс мәктәп тә ҡыҫҡартылған тинеләр.

Тирмән ауылында 60-80-се йылдарҙа гөрләп эшләгән матур мәҙәниәт йорто булды. Унда һәүәҫкәр артистарҙан тупланған халыҡ театры ла эшләне, арыу ғына тамашалар ҡуйҙылар. Хәҙер ҙә бар ул мәҙәниәт усағы. Әммә бик иҫкергән, оҙаҡ йылдар йүнле ремонт күрмәгән, иҙәндәре һелкенеп тора. Ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡаныбыҙҙа, Яңы йыл тамашаһын күрәйек, тип, беҙ ҙә барҙыҡ унда. Түр башына русса "С Новым годом!" тип яҙылған плакат эленгән. Башҡорттар ғына йәшәгән боронғо ауылда, мәшһүр шағирҙар Сафуан Әлибай, Ғәбиҙулла Зариповтарҙың тыуған ауылында, ошо күренеште күрермен тип һис уйламағайным. Унышы ярай, бына ауыл һәүәҫкәрҙәре көсө менән ҡуйылған тамаша бөтөнләй кәйефте төшөрҙө. Верка Сердючкаға оҡшарға тырышып, бер егет бик осондо. Йәш йырсы-бард, һәүәҫкәр композитор Альбина Шәмсетдинованың "Башҡорт егетенә" тигән һәр кемде уйландырырлыҡ, ғәмебеҙгә үтерлек, күңелде үҫтерерлек, милли идея сағылышы булырлыҡ тәрән эстәлекле йырының көйөнә "Рәсәй Клавдиялары" тип иғлан ителгән ҡыҙҙарҙың туҙға яҙмаған бейеүе бөтөнләй хәлде алды. Етмәһә, ошо йәмһеҙ күренеште шаяртыу ғына тип ҡабул итеп, тамашасылар гөрләтеп ҡул сапҡан булды. Эргәмдә баҫып торған русса һөйләшкән һылыу башҡорт ҡыҙы әле генә яңғыраған йырҙың һүҙҙәрен аңламауын белдерҙе, ҡысҡырып көлдө. Телде белмәгәс, уның йөрәге лә әрнемәне, башы ла ауыртманы... Иҫ китмәле битарафлыҡ сағылышы булды был күренеш. Ә бит мәҙәниәт усаҡтары миллилектең халыҡ аңынан юйылмауы, юғалмауы өсөн сатырман йәбешеп көрәшергә, башҡорт халҡының, йәштәрҙең милли үҙаңын тейешле кимәлдә үҫтереү өсөн тырышырға тейеш. Шулай үҙебеҙҙән үҙебеҙ көлһәк, беҙҙең мәнфәғәттәр өсөн кем көрәшер, кем тырышыр?

Минең был һөйләгәндәрем бер район миҫалында мәҙәниәт усаҡтары эшенең һүнеп ҡалыуы, уның эҙемтәһе булараҡ, йәштәр, балалар араһында милли рухтың һүрәнләнеүе, туған телгә, туған моңдарға хөрмәт бүҫкәреүе тураһында булды. Бындай осраҡтарҙа ни эшләргә була? Хөкүмәтебеҙҙең мәҙәниәтте үҫтереү буйынса бик матур проекттары бар. Шул проекттар сиктәрендә ҡаралған бюджетты ауылдарҙағы мәҙәниәт усаҡтарын тергеҙеүгә лә йүнәлтергә кәрәк. Мәҙәниәт өлкәһендәге Президент гранты ла юҡ-бар, идея-йөкмәткеһе булмаған ялтырауыҡ тамашалар уҙғарыуға сарыф ителмәһен, милли мәҙәниәт мәнфәғәттәрен урап үтеп, ҡағыҙҙа ғына күрһәтелгән ялған проекттар сөңгөлөндә батып ҡалмаһын ине. Унан һуң, республика мәҙәниәте өлкәһендә эшләгән рухлы йәмәғәтселектең үҙенсәлекле агитдесанттар менән халыҡ араһына даими сығыу йолаһын да тергеҙергә кәрәк. Юҡһа, яҙыусылар, шағирҙар ғына түгел, артистар ҙа онотто бит ауылдарға сығыу тигәнде. Тағы... Тағы ниҙәрҙе әйтеп бөтмәгәнмен, уны башҡалар дауам итер, тип ышанам. Ауыл яҙмышына берәү ҙә битараф ҡалырға тейеш түгел бөгөн.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА,**
**Өфөләге 123-сө лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы.**

ЗАУЫҠ

*Риф МИФТАХОВ*

# ХИКМӘТЛЕ ҺҮҘ КҮП БУЛМАЙ

Һәр милләттең азатлыҡҡа
Хоҡуғы һәм хаҡы бар:
Ватанында ер, тел булһа,
Ил тарҡалмаҫ хаҡлыҡ бар.

* * *

Тимерҙәр ҙә тутыға тик торһа,
Аҡмаған һыу әйләнә ҡортлоға.
Юлдарын һәм урынын таплаһа,
Кешеләр, хатта, ер, ил юҡ була.

* * *

Ғүмер Китабына мин һуң нимә яҙҙым,
Хата булды әллә һәр бер аҙым?..
Юҡ, үкенәм: халҡым өсөн, хаҡлыҡ өсөн
Йәшәү алды йөрәгемдән шиғырҙарым.

* * *

Үткән көндөң күҙен йомдоҡ йоҡо менән,
Ҡайтмаҫ өсөн юғалды көн һинән, минән...
Ҡалҡты Ҡояш, нурлағыҙ, тип күңелдәрҙе -
Бер-берегеҙҙе тик шәфҡәтле нурҙар менән.

* * *

Бәндәләр юҡ бөтәһен дә белгән,
Барыһын да булдыралған:
Алла күреп бер кемгә лә табынмайыҡ,
Табыныуҙар - заман сире - ялған.

* * *

Бары үҙ маҡсатын уйлап,
Милләттәр араһында.
Ҡотҡо тaратҡандар енде
Күпселек арҡаһында...
Дөрөҫлөк бармы бында?

* * *

Илендә ҡурҡҡандар
Бер эш тә ҡылмаҫтар.
Ерендә өрккәндәр
Илгә баш булмаҫтар.

* * *

Бөгөлә, һына күп емешле ағастар,
Яҡшы атты йышыраҡ тышаулайҙар...
Был донъяла маҡтау, данлауҙан тыш,
Яҡшылығың өсөн яза ла бар.

* * *

Күргәс "дуҫ"тың, дошман яһап, тикшергәнен,
Булды селлә эҫеһендә өшөгәнем.
Яҡлау һүҙен "дошманым"дан ишеткәнем,
Булды бер мәл шатлығымдан иҫергәнем...
Юҡ, артманы кешеләргә шикләнеүем,
Артты шөбһәм - үҙ-үҙемә бикләнеүем:
Әҙәм затын, донъя хаҡын, выждан менән
Үлсәп кенә, әле булһа төшөнмәнем.

* * *

Һап-һау - тәнең, янда - йәрең,
Азатлыҡ, хоҡуҡ - тәхет.
Әҙәм өсөн үҙ ерендә
Ысыны - ошо бәхет.

* * *

Әгәр азат була алһаң
Мал-аҡса байлығынан:
Тән-йәнең сирҙән арыныр -
Юғалтыу ҡайғыһынан.

* * *

Һыуҙағы Ай яҡтыһындай,
Фани донъя бик ҡыҫҡа:
Хыялыңды Ер өҫтөндә
Атҡарып ҡал тормошҡа.

* * *

Юл һалдырып була таулы-ташлы ерҙән,
Йорт төҙөргә мөмкин хатта емеректән.
Һаран - йомарт, ҡурҡаҡ - ҡыйыу, ахмаҡ
Аҡылланыр тимә, көтмә - булмай икән.

* * *

Иҫәр менән дуҫ булыуҙан
Ниндәй һиммәт!
Аҡыллы йән менән бәхәс
Күпкә ҡиммәт.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ҡулланыусы кәрзиненә иң кәрәкле һәм осһоҙло аҙыҡтар инә - икмәк, һөт, сәй, ярма. Шәкәр юҡ. Сыр, балыҡ, колбаса тураһында ла ауыҙҙы асырға кәрәкмәй. Бушлай сырҙың ҡайҙа булғанын былай ҙа беләләр.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АМАРИЛЛИС...

## ғашиҡтар гөлө

■ Тауыҡ ите, йомортҡа, ҡуҙаҡлылар, диңгеҙ балығынан торған диета баш мейеһе ҡартайыуын булдырмай һәм хәтерҙе нығыта. Быларҙың барыһына ла холин - В витамины төркөмөнә ингән витамин булышлыҡ итә. Британия ғалимдары асыҡлауынса, холинға бай ризыҡтар менән туҡланыусылар төрлө тестарҙы яҡшыраҡ үтә. Ғалимдар билдәләүенсә, ул инсульт хәүефен дә түбәнәйтә.

■ Белгестәр әйтеүенсә, амариллис гөлө ғашиҡтар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшырта. Фэн-шуй буйынса, адиантум - ҡатын-ҡыҙ үҫемлеге, ул гүзәл затҡа ярҙам итә. Тормошоғоҙҙа үҙгәрештәр булыуын теләһәгеҙ, бегониялар үрсетегеҙ. Белгестәр тап бегонияның шәхси тормошто яйға һалырға булышлыҡ итеүен билдәләй. Хлорофитум - тәбиғи кондиционер, ул кире энергияны ыңғайға әйләндерә. Был гөлдө аш бүлмәһендә тотоу яҡшыраҡ. Төнөн кислород бүлеп сығара торған үҫемлектәр - каланхоэ, алоэ ла бүлмәләге һауаны яҡшыртасаҡ.

■ Ғаиләлә ата-әсәнең йыш талашыуы баланың психик һәм физик сәләмәтлегенә йоғонто яһай. Энчепинг (Швеция) сәләмәтлек институты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, айырылышыу, низағ-талаштар баланың иммун системаһын ҡаҡшата. Ата-әсәһе араһында дошманлыҡ тойғолары барлыҡҡа килгән ваҡытта балалар йышыраҡ ауырый. Белгестәр иҫәпләүенсә, стресс мәлендә кортизол гормоны күберәк бүленә, ул иммунитетҡа йоғонто яһай һәм төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килеү хәүефе күтәрелә.

■ Спорт менән шөғөлләнгәндән һуң тәндә барлыҡҡа килгән ауыртыуҙы физик күнекмәләр менән бөтөрөргә була. Элек мускулдар ауыртыуынан массаж ғына ҡотҡара тип иҫәпләнһә, хәҙер белгестәр физик күнекмәләр яһарға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, күнекмәләр ҙә, массаж да организмды һөт кислотаһы кеүек метаболизмдың кире продукттарынан арындыра.

■ Британия ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге күнекмәләр ябығыуҙың һөҙөмтәлелеген 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Америка диетологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, татлы ризыҡтар яратыу сәләмәтлеккә зыян килтермәй. Хатта йыш һәм күп итеп кәнфит ашаусыға ла йөрәк-ҡан тамырҙары сире, һимереү кеүек хәүеф янамай, эш бында туҡланыуҙа ғына түгел, ти ғалимдар. Йәғни, татлы ризыҡ ашау һимереү хәүефе менән бәйле түгел, быны тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың тән массаһы индексы, бил һәм май ҡатламы үлсәме күрһәткестәре раҫлай. Шулай уҡ уларҙың ҡан баҫымы, холестерин кимәле, инсулин резистентлығы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен дә булдырыу хәүефе тыуҙырмаған.

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

**Аҡса менән эш итмәгән, уның ниндәй көскә эйә булғанын аңламаған бер генә кеше лә юҡтыр. Шыптырлап торған бәләкәй генә бер ҡағыҙ киҫәге үҙендә шундай ҙур ҡөҙрәт туплауға өлгәшкән. Ул бөтәһенә лә кәрәк, барыһы ла уны ярата. Үҙе йәнһеҙ булһа ла, тормошто йәнләндереп, күңелде лә йылытып ебәрә. Ҡасандыр, бәхет аҡсала түгел, тип һанағандар ҙа хәҙер был һүҙҙәрҙең заман ҡалыптарына тура килеп етмәүе тураһында беләә.**

# АҠСАЛЫНАН АҠСА ҺОРАМАҒЫҘ...

## ә нисек аҡса эшләргә икәнен һорағыҙ



### Йөҙ һум аҡсаң булғансы...

Әле күптән түгелге совет заманында тик аҡса яғын ғына ҡайғыртыу, бар нәмәне лә аҡса күҙлегенән хәл итеү ҙур ғәйеп һаналды. Шуға күрә лә беҙҙе бәләкәйҙән үк "Аҡсаң булмаһа ла выжданың булһын", "Аҡса тапҡансы, аҡыл тап", "Йөҙ һум аҡсаң булғансы йөҙ дуҫың булһын", тип тәрбиәләргә тырыштылар. Әммә теләйбеҙме, юҡмы, заман үҙгәргән һайын рухи ҡиммәттәр ҙә үҙгәрә бара. Тимәк, мәҡәл-әйтемдәребеҙҙең, йырҙарыбыҙҙың да мәғәнәһе, ишараһы икенсе төҫ ала. Хәҙер иһә, ана, "Аҡса кемдеке - мал шуныҡы", "Аҡсаң бөттө - ҡәҙерең бөттө", "Аҡса эсте тишмәй", "Аҡыллы аҡса йыя, аҡылһыҙы таш йыя" тигәнерәк мәҡәлдәр телмәребеҙгә нығыраҡ үтеп инә бара. "Ҡул - ҡулды , ике ҡул битте йыуа", "Һин - миңә, мин - һиңә" кеүек әйтемдәр ҙә туранан-тура аҡса мәсьәләһенә ҡағыла һәм заманыбыҙҙың ниндәй булыуына асыҡ ишара яһап, тағы ла бер тапҡыр аҡсаның бөгөнгө тормоштағы урынына ишаралай.

Ҡасандыр "Ҡәҙерле генә ғүмер, зауыҡлы ғүмер, һатып алып булмай аҡсаға" тип йырлағандар, ә бөгөн интернет селтәрҙәре, урам буйҙары, гәзит биттәре кемдеңдер ғүмерен һаҡлауға, донор ағзалар һатып алыуға аҡса кәрәк, тигәнерәк иғландар менән сыбарланған. Был иһә, күптәнге йырҙың эстәлеген инҡар итеп, аҡсаң бар икән, ғүмерҙе лә һатып алып булыуын дәлилләгән һымаҡ...

Мәҡәлдәр ҙә, йәшәйеш аҡылы ла заманына ярашлы булырға тейештер ҙә, бәлки. Аҡсалының ҡулы уйнағанда, осон-осҡа ялғап йәшәгән аҡсаһыҙҙарҙың ниндәйҙер рухи ҡиммәттәрҙе уйлап ултырырға теләге лә, мөмкинлеге лә ҡалмайҙыр, сөнки ундайҙарҙың киләсәге түгел, ҡайһы саҡ хатта иртәгәһе лә билдәһеҙ була. Башланған көнөнөң проблемаларһыҙ ғына үтеп китеүенә лә мең шөкөр итә ул. Әлбиттә, бөтәһенең дә хәле бер сама түгел. Тормош мәшәҡәттәренә күмелеп, уның икегә бүленеүен аңғармай ҙа ҡалғанбыҙ. Кемдер үҙ хәлен артығы менән яҡшыртып өлгөргән, йылына әллә нисә тапҡыр сит илдә ял итә, ә икенселәре иһә сит илдең ҡайҙа икәнен дә белмәй, дөйөм ятаҡта йәки кеше фатирында осон-осҡа ялғап көн күрә. Бына ошо һуңғыларының иҫәбен самалап тороу өсөн Рәсәй субъекттарында квартал һайын йәшәү минимумы билдәләнә лә инде. Мәҫәлән, Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән билдәләнгән был минимум күләме республикала 2013 йылдың аҙағына 6500 һумға ла етмәне...

### Йәшәү минимумы нимә өсөн кәрәк?

Йәшәү минимумы йәки ҡулланыусы кәрзине төрлө социаль программалар әҙерләгәндә һәм уларҙы тормошҡа ашырғанда халыҡтың йәшәү кимәлен билдәләү өсөн тәғәйенләнә. Ул Рәсәйҙә өс төп позицияға бүленә: аҙыҡ-түлек, аҙыҡ-түлек булмаған тауарҙар (аяҡ кейеме, өҫ кейеме, көнкүреш әйберҙәре һ. б.) һәм түләүле хеҙмәттәр. Түләүле хеҙмәттәргә социаль норма буйынса торлаҡ, коммуналь, транспорт һәм башҡа сығымдар ингән. Йәшәү минимумы тағы ла өс социаль төркөмгә: хеҙмәткә һәләтлеләргә, пенсионерҙарға һәм балаларға тәғәйенләнә. Әлегә бүленгән сумма был социаль төркөмдәрҙең төп ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә етмәй. Аҙыҡ-түлектең минималь йыйылмаһы еңел эштә эшләүселәргә иҫәпләнгән, ә халыҡтың күп өлөшө ауыр шарттарҙа эшләй. Аяҡ кейемен һәм пальтоны ла оҙаҡ йылдар кейеп булмай. Ғөмүмән, ҡулланыусы кәрзиненә иң кәрәкле һәм осһоҙло аҙыҡтар инә - икмәк, һөт, сәй, ярма. Шәкәр юҡ. Шәкәрһеҙ сәй эскәндән әле бер кем дә үлмәгән. Сыр, балыҡ, колбаса тураһында ла ауыҙҙы асырға кәрәкмәй. Бушлай сырҙың ҡайҙа булғанын былай ҙа беләләр.

"Кәрзингә" ингән кейемдәрҙе нисә йыл кейеү кәрәклеге лә алдан иҫәпләнгән. Урта йәштәге ирҙәр 1 йылға 7 ойоҡ, 2 йылға 5 трусик һәм 3 йылға 3 майка кейеп туҙҙырырға тейеш. Өҫ кейемдәренән иһә эшләүсе ирҙәр 8 йылға бер йылы куртка, 9 йылға бер ябай куртка, 7 йылға бер пальто һәм плащ, 5 йылға бер костюм-салбар, 3 күлдәк, 1,5 йөн салбар, 4 йылға 1 джинсы һәм 1 спорт костюмы, 5 йылға бер пар йылы итек, ике пар ҡыҫҡа ҡуңыслы итек, 3 йылға бер 1 пар тапочка һәм кроссовка, 7 йылға бер тапҡыр резина итектәр һатып ала ала. Статистика иҫәбе буйынса, бер джемпер 5 йылға етергә тейеш. Бынан тыш, ирҙәргә йәшенә ҡарамайынса, йылына 12 битлек бер дәфтәр, 2 ручка ҡаралған. Ошондай уҡ яҙыу кәрәк-яраҡтары ҡатын-ҡыҙҙарға ла тейешле. Гүзәл заттар өсөн яҙғы-көҙгө пальто һәм плащ - 7 йылға, ҡышҡы пальто - 8 йылға, ә 1,5 йөн һәм 2 кизе мамыҡ күлдәк, 1 халат, 2 блузка, 1 джемпер 5 йылға иҫәпләнгән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың спорт костюмы 3 йыл хеҙмәт итергә тейеш. Эске кейемдәрҙән - 2 йыл да 4 айға 5 трусик, 3 йылға ике бюстгалтер, 3 йылға бер төнгө күлдәк, 4 йылға ике комбинация, 2 йылға 6 пар колготки ҡаралған, ә бына ойоҡ исемлектә бөтөнләй юҡ. Аяҡ кейемдәре: 5 йылға 1 пар ҡышҡы итек, 3 йылға 1 пар көҙгө итек, 1,5 йылға 1 пар йәйге туфлиҙар, 3 йылға 1 пар тапочка. Ҡатын-ҡыҙҙар резина итекте ирҙәргә ҡарағанда 2 йылға әҙерәк кейергә тейеш, тип иҫәпләнә.

Урта статистик ғаиләгә 20 йылға өс юрған, 15 йылға өс мендәр, 12 йылға алты тәрилкә, 20 йылға бер һыуытҡыс һәм бер кер йыуыу машинаһы, 40 йылға бер теген машинаһы, 25 йылға бер кейем шкафы, 22 йылға бер карауат тейеш, тип ҡарала.

Әгәр ҙә сәләмәтлегең яҡшы икән, иң осһоҙло макарондар, ярмалар, түбән сортлы һинд сәйе менән туҡланып, туғандарыңдан ҡалған йәиһә изге кешеләр биргән кейемдәрҙе кейеп, йәшәү минимумы тип иҫәпләнгән был аҡсаны еткереп тә булалыр. Ә бына көнөң ошо аҡсаға ҡалып сирләп китһәң, 6500 һумға ғына бер нисек тә "иркенләп" ауырый алмауың көн кеүек асыҡ. Бында инде икенең бере: йә дауаланаһың, йә ашамай-эсмәй, урамда йәшәргә өйрәнәһең, сөнки дауаланыуға тотонған аҡса иҫәбенә фатир өсөн түләүҙәр ингәнен дә онотorға ярамай.

### Хөкүмәтебеҙ кемдәр хаҡында күберәк уйлай?

Хөкүмәтебеҙ балалар хаҡында ла онотмай. Шуға ла балалар пособиеһына ла "йәлләмәйенсә" бер нисә һум өҫтәп тора. Бынан тыш, депутаттарыбыҙ, дәүләт органдарында эшләүселәребеҙ ҙә бар бит әле. Улар ҙа тере кеше, уларҙы ла ҡайғыртыу кәрәк. Ошо йәһәттән Рәсәй Президенты указына ярашлы, 2013 йылдың 1 сентябренән депутататтарҙың айлыҡ эш хаҡы 253 мең һумға күтәрелде. Был сумма эсенә ай һайын аҡсалата бүләкләү һәм дәртләндереү ҙә инә. Депутаттарҙы аҡсалата бүләкләү 51,8 мең һумға (32,9 мең һумдан), а аҡсалата дәртләндереү 202 мең һумға күтәрелде (128,4 мең һумдан) .

Бер депутаттың 253 мең һумлыҡ айлыҡ эш хаҡы, ул:

- 39 йәшәү минимумы;
- 6 мең һум алған пенсионерҙың 3,5 йыллыҡ пенсияһы;
- 5 тоннанан ашыу яҡшы сортлы алма (1 кг - 50 һ.);
- 1 тонна 250 кг ит (1 кг - 200 һ.);
- 25 компьютер;
- 14 мең икмәк (18 һ.);
- 6 мең 300 литр һөт (1 литры 40 һ.).

Депутаттарға аҡса өҫтәү буйынса Дәүләт Думаһы депутаты, ЛДПР лидеры В. Жириновский үҙ фекерен шулай тип белдерә:

- Депутаттар корпусының 70 проценты бик насар эшләй йәиһә бөтөнләй ҡыл да ҡыбырлатмай. Эш хаҡын йыш ҡына өҫтәп торған ергә бөтәһе лә йәбешеп ята. Эшләмәүҙең өс сәбәбе бар: эшләй белмәйҙәр, теләмәйҙәр, дәрәжә, дан артынан ҡыуалар. Тик ултырып ҡына шул тиклем аҡсанан кем баш тартһын! Әле - 253, яҙға - 400, артабан 500 мең һум... Рәхәт бит... Депутаттарҙың эш хаҡын 50 мең һум итеп, йыл һайын 10 процент депутатты ротациялап (алыштырып) торорға кәрәк. Ғөмүмән, Дәүләт Думаһына - 200, төбәк парламенттарына - 20, ә муниципалитет кимәлендә - 5 депутат етәсәк. Был осраҡта әллә күпме аҡса экономияларға булыр ине.

Шуныһы ғәжәп, 200 мең һумдан ашыу аҡса алып та, дәртләнеп эшләй алмағас, ул депутаттарҙың ни кәрәге барҙыр? Ә бына ышаныс яулау өсөн халыҡ нәфсеһен кәрт кеүек бик оҫта уйната белә улар. Халыҡтың иң ауырткан ерен самалап, тап шуның өсөн генә баҫа ла, социаль стандарттар күләменең бәләкәйлегенә, ниндәйҙер льготалар булмауына баҫым яһап, ябай халыҡтың бер ҡатлылығы менән файҙалана. Ас хәлен туҡ белмәй, тигәндәре лә доп-дөрөҫ. Айына "тонналап" ит-май ашаған депутаттың төшөнә лә инмәйҙер инде ҡайһы берәүҙәргә алма, иттең байрамдарҙа ғына эләгеүе тураһындағы уй.

Ә халыҡ күптән инде юрғанына ҡарап, аяғын һуҙырға өйрәнгән. Бөгәрләнеп ятырға риза булмай, иркенләп ятырға теләгәндәре генә ҙурыраҡ, йылыраҡ юрған һатып алыу өсөн ҡара тир түгә. Шуны алыу өсөн аҡса эшләй, ғүмеренең иң матур йылдарын әрәм итә, икенсе береһе тыныслығын, өсөнсөһө һаулығын юғалта. Ә аҡса барыбер етмәй. Йылы юрғандың хаҡы ла бер урында ғына көтөп тормай, үҫә генә бара. Етмәгәнде эҙләүҙән төңөләп, өйҙә генә ятам тигәндәренеке лә килеп сыҡмай, сөнки ашамай йәшәргә әле берәү ҙә өйрәнмәгән. Бына шунан һуң, эш аҡсала ғына тормай, тип әйтергә телең дә бармай. Улай әйләндерһәң дә, былай тулғандырһаң да, барыһы ла нәҡ шул аҡсаға килә лә төртөлә. Шуныһы ҡыҙыҡ, күптәр аҡса эшләйем, тип, һаулығын бөтөрә лә, юғалткан һаулығын кире ҡайтарыу өсөн тағы ла нисегерәк аҡса табыу өсөн баш вата. Эҙләйбеҙ, тырышабыҙ, саҡ ҡына булһа ла аҡсаны күбәйтергә теләйбеҙ. Әммә шул уҡ ваҡытта аҡсаға ла һатып алып булмаған иң ҡиммәтле нәмәләрҙе юғалтҡанды аңлап та етмәйбеҙ. Яҡындарыбыҙ менән булған бәйләнеште лә, һаулығыбыҙҙы ла кире ҡайтарып булмауы бик һуңлап ҡына барып етә башыбыҙға.

## Бер эш хаҡына йәшәп буламы?

Әлфирә бер ҡыҙ баланы яңғыҙы үҫтерә. Уның менән дә аҡса тураһында һөйләшеп алдыҡ.

-10 мең һум эш хаҡы алам, - тип һөйләп китте ул. - Шуның 1500 һумын коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләйем. Кредитҡа телевизор, компьютер һатып алғайным, ай һайын шулар өсөн 7 мең түләнем. 700 һум аҡса көн һайын эшкә автобусҡа йөрөүгә китә. Мәктәп ашханаһы өсөн айына 800 һум бирәм. Ике көнгә 18 һумлыҡ бер икмәк алыу өсөн айына 288 һум китә. Ҡалған 512 һум аҡса иң кәрәкле аҙыҡ-түлек алырға ла етмәй. Ә бит ашауҙан башҡа көтмәгәндә килеп сыҡҡан сығымдар ҙа бар. Мәсеткә барып хәйер бирәһең, килгән кешегә сәй эсерәһең, уйламаған ерҙән үҙеңә лә кеҫтәнәс тотоп, берәйһенә барырға тура килә. Ә ауырып китеү тураһында уйларға ла ҡурҡаһың. Был осраҡта күләмәстәге кеүек "Ауырыу ике төрлө була: береһе "бүстәк", икенсеһе "хана". Ханаһы бөтөнләй йүнәлмәй, ә бүстәге үҙе лә үтә", тип тик йөрөйһөң. Ваҡытында бурысты түләп барыу өсөн бер туҡтауһыҙ үтескә алып торам. Ышаныстан сыҡмаҫ өсөн бурысты әйткән көнөнә уҡ кире ҡайтарып бирергә кәрәк. Шуға күрә, берәүҙән алып торорға ла икенсеһенә бирергә, уға бирергә ваҡыт еткәс, өсөнсөһөнән һорарға тура килә. Тормошта аҡса мөһим түгел тигәндәре менән бөтөнләй ҙә килешмәйем. Кемдәрҙең аҡсаһы күп, шулар ғына матур һүҙҙәр һөйләргә, рухи яҡтан ныҡлы кеше булып ҡыланырға ярата. Аҡсаң юҡ икән, был тормошта һин бер кем дә түгелһең...

Ошо урында танылған бер йырсының "Юлдаш" радиоһы аша "Бер эш хаҡына ғына йәшәп буламы?" тигән һорауға яуап биргәне иҫкә төшә. "Милләттәштәребеҙ аҡса ҡолона әйләнеп, рухи ҡиммәттәр хаҡында бөтөнләй онотто. Булғанына шөкөр итеп йәшәй белмәйҙәр. Күберәк, мулыраҡ табыш алыу хаҡында ғына уйлайҙар. Аҡса, тип баш ватҡансы, күберәк атай-әсәйҙәребеҙ, уларға ярҙам итеү, тыуған илебеҙ хаҡында уйлаһаҡ ине. Шөкөр итһәң, бер эш хаҡына ла бынамын тигән итеп йәшәп була", - тигәйне ул. Өйләнмәгән егет бөтә республика халҡына, бер эш хаҡына ла йәшәргә була, тип аҡыл өйрәтһә лә, буш ваҡыттарында төрлө байрамдар, саралар үткәреп аҡса эшләүен дә йәшермәне. Әммә уның әйткәндәре ысынлап та аҡсаға мохтаж булмағандарға, йәки үҙе кеүек, эштән һуң да өҫтәмә килем ала алғандарға ҡағылалыр. Ә Әлфирә кеүек күптәр бындай мөмкинлеккә эйә түгел. Ул мөмкинлекте булдырырға кәрәк, тиер ошонда уҡ кемдер. Нисек итеп? Әйҙәгеҙ, өйрәтәйек быға. Кемдер бер бай кеше:"Минән аҡса һорамағыҙ, ә нисек аҡса эшләргә кәрәклеге тураһында һорағыҙ", - тип бик дөрөҫ әйткән түгелме?..

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# УҪАЛ ИНӘЙГӘ РӘХМӘТЛЕМЕН

**Был хаҡта яҙырғамы, юҡмы, тип, оҙаҡ уйландым. Үҙәк телевидениенан Жанна Фриске тураһындағы тапшырыуҙы ҡарағандан һуң, яҙырға, тигән ҡарарға килдем. Тормошомдағы был ваҡиға, бәлки, башҡаларға ла фәһем булыр.**

Тәүге балам сирле булып тыуғас, дауахананан сығышманыҡ. Өйгә ҡайтып бер аҙна ла йәшәмәйбеҙ - йәнә палата, йәнә дарыуҙар. Балам өсөн өҙгөләнеүҙәрем! Уның алдында үҙемде ғәйепле тойоуҙарым! Күҙемдән осоп ҡына барған кеүек бит ул. Һыҙланып илаған саҡтарында йөрәгемә нисек ҡан һауғанын белһәгеҙ...

Үҙем дә, ирем дә шаулаға ҡалдыҡ. Айҙар буйы беҙҙе палатала ғына күргән тормош иптәшемдең бер саҡ яҡҡа әйләнә башлағанын тойҙом. Шулай бер өйгә ҡайтҡаныбыҙҙа, ишек алдына сығып ултырып, үҙемә аҙ генә ял бирергә булдым. Шул саҡ ишек алдына беҙҙең подъезда йәшәгән, матур инәй, тип йөрөткән ҡатын килеп сыҡты. Һаулыҡ һорашып ҡына йөрөйөм, һөйләшеп ултырғаным юҡ ине. Килеп янымға ултырып, хәл-әхүәл һорашты.

- Эй, инәкәй, балам ауырый ҙа ауырый, дауахананан баш сыҡмай, - тип илап ебәрҙем. - Хәҙер өс йыл була бит инде...

- Ишетә-күрә йөрөйөм, - тине инәй. Өндәшмәй бер аҙ ултырғас, шулай тип өҫтәне: - Бына нимә, ҡыҙым, һин хәҙер, балам ауырый, тип, ғүмер буйы тормош матурлығын күрмәй йәшәргә итәһеңме? Үҙенә күҙ һал - һинә бит 50 йәш бирерлек, ә һин, белеүемсә, әле бары 30-ҙа ғына. Ирең етем быҙау кеүек йөрөй, ситкә ҡарай башлауы ла бар, ихата тулы яңғыҙ ҡатын...

Инәй миңә һынап ҡараны. Уға асыуым сыға башлағанын тойҙом. Иң ҡәҙерле йән эйәһе - балам ниндәй хәлдә, ә ул миңә әллә нимә һөйләп ултыра. Ниндәй тормош матурлығы ти ул!..

- Үпкәләмә, һылыу... Тормош асылы шулай. Йәшһең әле, тап икенсе баланды, тап өсөнсөһөн, бына тигән шалҡан кеүек сабыйҙар табып алырһың. Улары янында быныһы ла нығынып китер, әрһеҙерәк үҫкән бала нығыраҡ була ул...

Инәй үтә күрҙе, тиерһең: шул мәлдә буйға уҙып, ауырымдан ҡотолорға йыйынып йөрөй инем.

- Улары ла ауырыу булып ҡуйһа? - тип, йәшле күҙҙәремде инәйгә төбәйем.

- Булмаҫ. Икегеҙ ҙә сәләмәтһегеҙ, йәшһегеҙ. Балаңа Аллаға табынған кеүек табынма. Ул бары тик Алланың һинә аманаты, уның ғүмере лә Аллаһ ҡулында. Бүләген тартып алам тиһә лә, ҡалдырам тиһә лә - Уның ихтыярында. Шәмәрәйеп йөрөүҙән тукта, күпме зәғиф балалар аҙаҡтан нығынып киткән, ана, Суворов бәләкәй сағында үләлмәгән бер бала булған, тип уҡығайным. Бала сырхамай ғына үҫмәй инде ул. Тәҙәлмәҫ ауырыу булһа ла - Аллаһ күпме ғүмер биргән, шунса йәшәр. Үҙенде лә, иреңде лә бәхеттән мәхрүм итеп йөрөмә улай...

Дөрөҫөн әйткәндә, башта инәйгә рәнйенем. Шуғаса кешеләрҙән гел йәлләү һүҙҙәре генә ишетергә тура килгәйне. Ә инәй мине йәлләмәне. Шелтәләне.

Һуңынан... Икенсе балабыҙ донъяға килде. Өсөнсөһө... Дүртенсеһе. Баш балабыҙ ҙа нығынып китте, шөкөр.

Шул саҡта тормошомда уҫал инәй осрағанына яҙмышыма әле лә рәхмәтлемен...

**Хафиза ЙӘНБИРҘИНА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Уйланырға мәжбүр итергә тейешле һорауҙар**

Эшкә бирелгәнлек хаҡында һүҙ барғанда, бында дүрт төр кешеләр күҙаллана.

**Эштән ҡасыусылар.** Алдарына бер ниндәй маҡсат ҡуймаусы, үҙҙәренә яуаплылыҡ алмаусы һәм бер нәмәгә лә тоғро булмаусылар.

**Шикләнеүселәр.** Ҡуйылған маҡсаттарына өлгәшә алыуҙарына шикләнгән, шуға күрә үҙҙәренә йөкләмәләр алып, ниндәйҙер эшкә тоғро булыуҙан ҡурҡыусылар.

**Ташлаусылар.** Алдарына маҡсат ҡуйып, алға барыу ауырлашҡан ваҡытта уйындан сығыусылар.

**Ахырғаса барыусылар.** Алдарына маҡсат ҡуйып, уға тоғро булырға үҙҙәренә йөкләмә-бурыс алып һәм уға өлгәшеү өсөн мөмкин булған хаҡты тулыһынса түләүселәр.

Һеҙ ошо төрҙәрҙең ҡайһыһына инәһегеҙ? Маҡсаттарығыҙға өлгәшергә насип булғаны бармы? Ысынлап та, тормошҡа ашырыу мөмкин һәм һеҙҙең мөмкинлектәрегеҙ сиктәрендә булған маҡсаттарығыҙҙың барыһына ла өлгәштегеҙме? Кешеләр һеҙгә ышанамы, артығыҙҙан эйәрергә әҙерҙәрме? Әгәр ошо һорауҙарҙың береһенә генә булһа ла кире яуап бирһәгеҙ, проблема эшкә тоғрологоҙҙоң кимәленә бәйле булыуы ихтимал.

**Өйгә эш. Эшкә тоғро булыу өсөн түбәндәгеләрҙе башҡарығыҙ:**

- Уны баһалағыҙ. Ҡайһы ваҡыт беҙ нимәгәлер ахырғаса тоғробоҙ, тип уйлайбыҙ. Ә ғәмәлдәребеҙ киреһен раҫлай. Ҡулығыҙға календарь һәм килем-сығымдар дәфтәрен алығыҙ. Бер нисә сәғәт ваҡытығыҙҙы йәлләмәйенсә, көнөгөҙҙө һәм аҡсағыҙҙы нимәгә сарыф итеүегеҙҙе анализлағыҙ. Эштә күпме ваҡыт уҙғараһығыҙ, төрлө хеҙмәт күрһәтеү урындарында, ғаиләгеҙгә, сәләмәтлек һәм ялға бәйле күнекмәләргә һ.б. күпме ваҡыт бүләһегеҙ. Йәшәүгә, күңел асыуға, шәхси үҫешкә, мәрхәмәтлелеккә күпме аҡса тотоноуығыҙҙы иҫәпләгеҙ. Барлыҡ ошо күрһәткестәр һеҙҙең маҡсатығыҙға тоғрологоғоҙҙоң ысын күрһәткесе ул. Һөҙөмтәне күргәс, үҙегеҙ ҙә аптырап ҡалырһығыҙ.
- Үҙегеҙгә нимә өсөн үлергә лә мөмкин икәнен аныҡ билдәләгеҙ. Бына һәр лидер үҙенә бирергә тейешле һорау: "Мин нимә өсөн үлергә әҙер?" Ниндәйҙер сиккә барып еткәндә лә, бындай мөһим эште һеҙ эҙемтәләре ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, барыбер эшләүҙән туҡтамаясаҡһығыҙмы? Күпмелер ваҡытығыҙҙы яңғыҙлыҡта үткәрегеҙ һәм бирелгән һорауҙарға яуап эҙләгеҙ. Һығымталарығыҙҙы яҙығыҙ. Һуңынан ғәмәлдәрегеҙҙең идеалдарығыҙға ниндәй кимәлдә тап килгәнен ҡарағыҙ.
- Эдисондың ысулын ҡулланығыҙ. Әгәр үҙегеҙгә алған йөкләмәне үтәү өсөн беренсе аҙым яһау бик ауыр икән, Томас Эдисон кеүек эшләгеҙ. Уның башында яҡшы фекер яралһа, ул, тәү сиратта, матбуғат конференцияһы ойоштороп, ошо хаҡта белдереү яһаған. Һуңынан инде уға бар кешегә иғлан иткән нәмәне уйлап табыу өсөн лабораторияға барыуҙан башҡа сара ҡалмаған. Пландарығыҙҙы халыҡҡа еткерегеҙ, был хаҡта ҡысҡырып әйтегеҙ - шул саҡта ғына һеҙ үҙегеҙгә алған йөкләмәгә тоғро булып ҡалырға тейеш буласаҡһығыҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

# ТВ ПРОГРАММАҺЫ





## 24 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Гетеры майора Соколова". Сериал (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10 "Обезьяна на плече". Худ. фильм
02.50, 03.05 "Ни жив, ни мертв". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Осторожно, фальшаки!" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Драматический сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (12+).
23.35 "Огонь, батарея! Неизвестная драма Севастополя" (12+).
00.35 "Девчата" (16+).
01.20 "Большая игра". Сериал.
02.50 "Закон и порядок-19". Сериал
03.45 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Илдар Ғүмәров
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтары йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Боронғо мөнәжәттәр"
21.00 "Кис ултырып". "Реалити-шоу"

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 05.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.40 "Көндәлек" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "OpenUfa-Полосатый тигр" (12+)**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Автограф" (6+).**
**23.30 "Чисто английские убийства" (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 Н.Абдыкадыров. "Последнее море Чингисхана" (12+).**
**05.15 "Орнамент".**

## 25 МАРТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
